Мартин Нимёллер исемле протестант дин әһеленең битарафлыҡ тураһында әйткәне: "Нацистар коммунистар артынан килгәс, мин бер ни әйтмәнем, сөнки мин коммунист түгел инем. Һуңынан улар социал-демократтар артынан килде, мин тын ҡалдым, социал-демократ түгел инем. Һуңынан профсоюз эшмәкәрҙәре артынан килделәр, шымдым, профсоюз ағзаһы түгел инем. Һуңынан йәһүдтәр артынан килделәр, тынлыҡ һаҡланым, йәһүди түгел инем. Һуңынан улар минең артымдан килде, ләкин быға ҡаршы сыға алырҙай бер кем дә юҡ ине инде..."

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28 ИЮНЬ - 4 ИЮЛЬ (ҺӨТАЙ - МАЙАЙ)

2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№26 (600)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Белдекле белеп эшләр, йәки күп эшләүгә ҡарағанда кәрәген эшләү мөһимерәк



3

Ҡош сөйөп һунар итеү



7

Тынлыҡты ишеткең киләме?

"Башҡорт Иле"нә кил!



8-9

Изге рамаҙан - шөкөр айы



12

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Байрамдар беҙгә йәшәргә ярҙам итәме, әллә камасаулай, мәшәҡәт кенә тыуҙырамы?

**Әлмира ҠЫУАТОВА, режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре:** Һеҙ был һорауҙы биргәс, Мостай Кәримдең "Йәйәүле Мәхмүт" спектакленән бер диалог иҫемә килеп төштө. Мин Зәмзәгөл ролен башҡарғайным. Мәхмүттең, кәрәк булһа, ателье стеналарын дер һелкетеп байрам итербеҙ, тигән һүҙҙәренә Зәмзәгөл: "Байрам тигән була. Үҙенең ике күҙе тулы һағыш. Байрамдарға оҙаҡ шул әле", - тип бошоноуына Мәхмүт: "Кәрәк булһа, байрамдарҙы үҙебеҙ уйлап сығарырбыҙ, үҙебеҙ яһарбыҙ. Уйнарбыҙ ҙа, йырларбыҙ ҙа, бейербеҙ ҙә, тик байрамһыҙ ғына йәшәргә ярамай, Зәмзәгөл, ярамай!" - тип яуаплай. Шуның кеүек, мин дә, байрамдар беҙгә бик кәрәк, тип әйтер инем. Йәмле июнь - республикабыҙҙа һабантуйҙар айы. Беҙ бөтәбеҙ ҙә ауыл балалары, гөрләшеп тыуған яҡтарыбыҙға байрамға ҡайтып төшәбеҙ, туғандарыбыҙ, яҡташтарыбыҙ, дуҫ-иштәребеҙ, һабаҡташтарыбыҙ менән осрашабыҙ, аралашабыҙ. Әллә ниҙә бер күрешкәс, һөйләшеп һүҙҙәр бөтмәй. Ләкин шуныһы ла бар: һуңғы ваҡытта һабантуйҙарыбыҙ бына ошолай яҡташтар осрашыуына әйләнеп бара һымаҡ тойола башланы миңә. Режиссер булараҡ, мин уны, асылда, хеҙмәт байрамы итеп күрәм. Илде икмәк менән туйындырыусылар, иген игеүселәр төп хужалары был байрамдың - шуны онотмайыҡ. Ғәҙәттә, байрамда сығыш яһарға саҡырылыусы бәғзе бер артист, әгәр яҡшы түләһәләр, тигән шарт ҡуя иң тәүҙә. Ә бына механизатормы, һауынсымы, малсымы - улар бер кемгә бер ниндәй шарт ҡуймай; ҡышмы, йәйме, ҡармы, ямғырмы - үҙҙәренең хеҙмәт бурыстарын баш баҫып атҡарыуҙарын беләләр. Улар изге кешеләр. Шуға ла улар байрам итергә икеләтә хаҡлы, тип уйлайым мин һәм уларҙың байрамына игенсене ҙурлау, ошо һөнәрҙең бәҫен күтәрешеү, ер кешеләренә, Ер-әсәбеҙгә, Раббыбыҙға рәхмәт әйтеү өсөн йыйылышайыҡ. Яңыраҡ мине Әбйәлил район һабантуйына саҡырғайнылар. Урындағы ижади коллективтарҙың репертуарын яңыртыу, байытыу буйынса эш алып барабыҙ, яңы йырҙар, бейеүҙәр өйрәнәбеҙ. Үҙегеҙгә мәғлүм, был яҡтарҙа йыр-моңға шул тиклем әүәҫтәр, талантлы халыҡ йәшәй бында. Хатта өлкән-өлкән инәйҙәргә тиклем дәртләнешеп, үҙҙәре теккән милли кейемдәрен, ҡашмауҙарын кейеп, сәсмәүҙәрен тағып, сығыш яһарға килгәндәр. Бына кемдәр улар тормошобоҙҙо байрам яһаусылар, уға ҡот биреүселәр. Ваҡытында бит уларҙың һәр береһе тыуған колхозында фиҙаҡәр хеҙмәт көсөн түккән. Улар байрам итергә хаҡлы.

**Салауат КӘРИМОВ, "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналының баш мөхәррире:** Күптәр өсөн, айырыуса алыҫта йәшәүселәргә, байрамдар, һабантуйҙар тыуған яҡҡа ҡайтып, туғандар, дуҫ-иштәр, башҡа яҡташтар менән күрешеп-һөйләшә торған берҙән-бер аралашыу сараһы, тип уйлайым. Хәйер, мин үҙем яҡташтар менән араны һыуытҡан юҡ, эшем буйынса тыуған яғымда байрамдарҙан башҡа ваҡыттарҙа ла йыш булам. Яҡташтарымдың эштәрен, көндәлек мәшәҡәттәрен күреп, хәл-әхүәлдәре менән һәр саҡ хәбәрҙар булырға тырышам; улар ниндәйҙер мәсьәләләрҙе хәл иткәндә минең дә ярҙамым теймәҫме, тип гел ҡыҙыҡһынып, хәлдән килгәнсә ярҙамлашып йөрөйөм. Һәм, ғөмүмән, баш ҡалабыҙҙа йәшәгән зыялыларыбыҙ, бигерәк тә төрлө өлкәләрҙәге белгестәр, тыуған райондары һәм ауылдарына ярҙам итеп торорға бурыслы, тип аңлайым мин. Байрамдар, тигәндән, унда кеше фәҡәт уйнап-көлөп, күңел асыу өсөн генә ҡайта икән, был бер ҙә яҡшы түгел, әлбиттә. Ә инде, әлеге әйткәнемсә, яҡташтарыңды борсоған теге йәки был проблемалар бар икән, байрамдар ана шулар хаҡында ла урындағы етәкселәр, халыҡ менән осрашып, һөйләшеү, фекер алышыу, уларҙы хәл итеү, кәрәк булһа, ярҙам итеп ебәреү юлдарын билдәләү өсөн бик уңайлы форсат ул. Әйткәндәй, тыуған ауылым Ғүмәрҙә был осор яҡташтарым территориаль йәмәғәт үҙидаралығы (ТОС) ойоштороу мәсьәләһе менән мәшғүл. Баҙар шарттарында улар хужалыҡ итеүҙең яңы юлдарын эҙләй, үҙ эштәрен яңыса ойоштороп, үҙ ерҙәрендә үҙҙәре хужалыҡ итергә теләй. Дөйөм көс, берҙәмлек менән ауылдаштарым алдарына ҡуйған маҡсаттарына өлгәшер, тип ышанам, сөнки күреп торам: ишембайҙар эшләй ҙә, ял да итә беләләр.

(Дауамы 2-се биттә).



## И, РАМАҘАН - НУРЛЫ АЙ!

*Рәжәп айы - ғәжәп ай,*
*Бәрәкәткә тулған ай,*
*Хаҡ Тәғәләм, Раббым өсөн*
*Бик ҡәҙерле булған ай.*

*Шәғбан айы - ғәзиз ай,*
*Хикмәттәргә, сергә бай,*
*Аллаһуның Хаҡ Илсеһе*
*Ҡәҙер иткән изге ай.*

*И, Рамаҙан - нурлы ай,*
*Йәнгә ғәзиз ул шулай!*
*Мәрхәмәтле, оло ай*
*Мең сауапҡа тулы ай!*

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

**(Авторҙың шиғырҙарын 11-се биттә уҡығыҙ).**

(Баш ҡаланың Салауат Юлаев проспектында төҙөләүсе Собор мәсетенең макеты).

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХАЛЫҠ АРАҺЫНДА БУЛАЙЫҠ!

**Исрафил ЙӘНСӘЙЕТОВ, Әбйәлил районының Рәхмәт ауыл Советы депутаты:** Колхоздар бөтөрөлөп, ауыл эшсәндәре Мостай Кәрим хикәйәһендәге ҡыҙыҡай кеүек "Теге яҡҡамы, был яҡҡамы?" тип аптырап торop ҡалды. Эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ ябай халыҡты күңел төшөнкөлөгөнә этәрҙе, "ҡырын тейәүселәр" күбәйҙе. Ауылдың бер-нисә әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, ауыл Советы депутаты булараҡ, мин дә, ошо күренештәргә ҡаршы көрәш башланыҡ. Дөйөм көстәр менән аңлатыу эштәре алып бара, кәрәк саҡта ҡаты саралар ҙа күрә торғас, ауыл тормошон бер аҙ яйға һалған кеүек булдыҡ. Бөгөн хатта иң айыҡ ауыл булыуыбыҙ менән ғорурлана алабыҙ. Халыҡ эсмәй, дөйөм эштәрҙә әүҙем ҡатнаша, бер-беребеҙгә терәк-таяныбыҙ. Башҡа ауылдарҙа ауыр мәсьәлә булып торған сүп-сарҙы дөйөм бер урынға түгеүҙе ойоштороуҙан башлап вафат булғандарҙы һуңғы юлға оҙатыу тәртиптәренә тиклем яңынан өйрәндек. Бер ғаиләгә ауыр ҡайғы килдеме, уны бар ауыл менән күтәрешәбеҙ. Зыяратҡа эскән килеш индермәйбеҙ, тәмәке тартыусының да ҡырҡ метр алыҫлыҡҡа китеп тартыуын талап итәбеҙ. Был да үҙенә күрә бер тәрбиә. Ауыл ерендә, эшһеҙлек, тип бот күтәреп ятыусылар юҡ. Ир-егеттәр биш тәҙәләш бригадаһына берләшеп, яҡын-тирәләге ҡалаларға эшкә йөрөй. Уның араһында тиреҫен һатып, малын тотоноп, тағы берәй юлын табып та аҡса эшләргә өлгөрә. Иң мөһиме, бөгөн ауылдаштарым беҙҙең эште бер кем дә эшләмәйәсәген, барыһы ла үҙ ҡулыбыҙҙа булыуына төшөндө.

Ә мин, депутатлыҡ бурысымды үтәп, район үҙәгенә барып, милләттәштәремдең тормошо етеш, киләсәге айыҡ һәм асыҡ булыуын ҡайғыртып, унынын-бынынын хәстәрләп йөрөйөм. Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә, тиҙәр. Юғарылағы кешеләр йыш алышынһа ла мине бөтөн инстанцияларҙа танып торалар. Берәүҙәр сират көтөп ултырғанда үҙҙәре үк саҡырып индерә лә: "Тағы нимәләр эшләргә уйлап йөрөйһең?"- тип ҡыҙыҡһына башлай. "Мин ни шул, һоранып йөрөйөм инде",- тием, көлөп. Иламаған бала ас ҡала, тигән кеүек, үҙең йүнләмәһәң, алдына килтереп бирмәйҙәр. Ауылыбыҙға быйыл газ үтә, инде юл һалдырыуҙы ҡайғырта башларға кәрәк. Колхоз заманынан алып ремонтланмаған таш юлдан йөрөйбөҙ, ул шул тиклем бәкәлгә һуға. Майын-ҡаймағын, итен дә йөрөтөп һатырға кәрәк, ә машина менән бер көн сыҡһаң, ике көн ремонтлайһың, тиһәм дә арттырыу булмаҫ. Ауыл хужалығы бөтөрөлгәс, баҙар шарттарына яраҡлашырға тырышып ятабыҙ шулай. Ҡайһы бер депутат коллегаларыма ҡарайым да, тамаҡ ярып, мин-минлектәрен алға ҡуйып йөрөгәнсе, халыҡты ойоштороп, берғәләшеп, кәңәшләшеп эшләһәләр ине, тип уйлап ҡуям. Ни тиһәң дә, күмәкләгән - яу ҡайтарған. Халыҡ араһынан сыҡҡан кеше бер ваҡытта ла унан өҫтөн була алмай.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Байрамдар беҙгә йәшәргә ярҙам итәме, әллә ҡамасаулай, мәшәҡәт кенә тыуҙырамы?*

*(Башы 1-се биттә).*

***Зөлфиә САБИРЙӘНОВА, уҡытыусы, Өфө ҡалаһы:*** Егерме йылдан ашыу баш ҡалабыҙҙа йәшәйем, фатир алдыҡ, ғаиләм бар. Эшемдән дә ундым кеүек, һөнәремде яратам, балаларға химиянан белем бирәм. Әлбиттә, кем әйтмешләй, бөтәбеҙ ҙә ауылданбыҙ, яйы сыҡҡан һайын, йәйге ялдарҙа унда ҡайтып, хәл-әхүәл белешеп китмәйенсә булмай. Үҙемдең тыуған яҡтарға ла, иремдең районына ла ҡайтҡылап китәбеҙ. "Ҡайтҡылап" тиеүем шунан: иремдең ата-әсәһе мәрхүмдәр инде, атаһы нигеҙендә кесе улы йәшәй, өс бала үҫтерәләр. Барһаң, өҙөлөп торһалар ҙа, кеше донъяһына ҡайтып төшөүе барыбер яйһыҙыраҡ, шуға йыш барып булмай унда. Быйыл хатта һабантуйға саҡырһалар ҙа барманыҡ. Хәйер, минең яҡҡа ла ҡайтманыҡ һабантуйға - беҙгә баҡсабыҙҙа ла бына тигән. Дуҫиш, класташтар менән дә күптән аралар һыуынған, беҙҙең дуҫтар Өфөлә хәҙер. Әйтһәм, әйтәйем инде бер әтнәкәһен дә: ауылымда эске көслә, хатта туғандарымды ла ҡайтҡан һайын эскән көйө, ҡайһыларын хатта лайҡыл хәлдә күреп, ирем алдында оятҡа ҡалып бөттөм, башҡаса ҡайтмайым, тип, үҙ-үҙемә һүҙ биргәнем дә булды. Тик ҡайҙа барһаң, атай-әсәйҙең хәлен белергә лә ҡайтмаһаң, дөрөҫ аңламаҫтар. Ә бына һабантуй, ауылдаштар, класташтар осрашыуҙарына бөтөнләй ҡайтҡаным юҡ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, эсеп, иҫереп йөрөгән туғандарымдан оялам. Район һабантуйы кеүек ҙур байрамдарға, мин уйлайым, билдәле, исемдәре танылған күренекле яҡташтар ҡайта, ә мин кем инде - ябай бер уҡытыусы, районым алдында бер хеҙмәт тә күрһәткәнем юҡ. Ғөмүмән, ижтимағи әүҙемлегем менән маҡтана алмайым. Эшем, ғаиләм бар, мәктәп коллективы ихтирам итә, балалар дәрестәремдән ҡасмай, күҙгә генә ҡарап торалар - минә тағы ни кәрәк? Районға байрамға ҡайтып, ҡайһы берәүҙәр кеүек үҙемде күрһәтеп йөрөмәһәм дә, тормошомдан ҡәнәғәтмен. Ә инде яҡташтарға берәй ярҙам кәрәк икән - ҡулымдан килгәнен эшләргә әҙермен, өндәшһендәр генә. Мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн байрамға йыйылғанды көтөп йөрөү кәрәкмәйҙер, миненсә, сөнки һәр нәмәнең үҙ урыны, тигәндәй, байрам - фәҡәт байрам булып ҡалырға тейеш.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамлана. Киләсәктә лә "Киске Өфө" гәзитенең тоғро уҡыусылары икәнегеҙҙе раҫлап, беҙгә дуҫ, теләктәш, таяныс булып ҡалыуығыҙҙы бик-бик теләйбеҙ. Әлеге миҙгел - баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғрологон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнде йөрәгегеҙ менән аңлаһағыҙ ине, тибеҙ.**



● Шулай итеп, 2014 йылдың икенсе яртыһына **50665** индексы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тингә**, **50673** индексынына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тингә** яҙылып була.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға **246 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум**.

**Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Июндә 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Гөлнур Яҡупованың "Төш юрау китабы"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog.kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәй Федерацияһында физик культура һәм спорт тураһындағы законға ҡул ҡуйҙы. Ул милли спорт төрҙәрен үҫтереүгә һәм популярлаштырыуға йүнәлтелгән. "Федераль законға ярашлы, Бөтә Рәсәй спорт төрҙәре реестрына ингән милли спорт төрҙәре буйынса спорт федерациялары ойоштоpола ала. Быға тиклем РФ ҡануниәте тарафынан был рөхсәт ителмәне. Бындай спорт төрҙәре исемлеге физик культура һәм спорт өлкәһендәге федераль башҡарма власть органы тарафынан раҫлана", - тип хәбәр итеә Рәсәй Президентының рәсми сайтында.

✔Республика Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов Ирландияның Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш Тулы хоҡуҡлы Илсеһе Оун О'Лири менән осрашыу үткәрҙе. Бергәләп эшләй алырлыҡ йүнәлештәр билдәләнде. Ирландия илсеһе үҙ-ара хеҙмәттәшлекте ауыл хужалығы, биологик ҡалдыҡтарҙы эшкәртеү, шулай уҡ мәҙәниәт өлкәһендә дә үҫтерергә мөмкин булыуын билдәләне. "Ипподромығыҙ бик ныҡ оҡшаны", тип билдәләне ул. "Ирландияла бындай кимәлдәге ипподромдар бар тип уйламайым. Ирландияла йылҡысылыҡ, айырыуса таҙа тоҡомло йылҡысылыҡ секторы бик үҫешкән. Әлбиттә, был өлкәлә беҙҙең тәжрибә етерлек. Бында хеҙмәттәшлек мөмкинлектәрен ҡарарға теләр инек", - тине илсе.

✔Рөстәм Хәмитов ваҡытынан алда Башҡортостан Президенты һайлауҙарына кандидат итеп раҫланды. Ҡарар "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан буйынса төбәк бүлексәһе конференцияһында йәшерен тауыш биреү юлы менән ҡабул ителде. РФ Коммунистар партияһы сәйәси партияһының Башҡортостан Республикаһы бүлексәһе комитеты бюроһы БР Президенты һайлауҙарына кандидат вазифаһына икенсе секретарь Юнир Ҡотлоғужиндың кандидатураһын хупланы.

✔Башҡортостан Республикаһының Санкт-Петербург ҡалаһындағы Даими Вәкиллеге бөтөрөлдө. Указға ярашлы, БР Президентының Эштәр менән идаралығына бөтөрөү процедураларын үткәрергә, шулай уҡ бушатылған хеҙмәткәрҙәргә ҡануниәткә ярашлы гарантиялар һәм компенсациялар бирергә, норматив хоҡуҡи акттарҙы сығарылған Указға ярашлы хәлгә килтерергә ҡушылды.

***✓ Кешене нисек итеп яңы тауарҙар һатып алырға мәжбүр итергә? Маркетинг тигән фәндең барлыҡҡа килеүе лә ошоноң менән бәйле. Һәм уйлап таптылар: тауарҙың хеҙмәт итеү ваҡытын кәметергә!***

*КӨНАУАЗ*

**Ғалимдар иң аҡыллы хайуандарҙың береһе - ҡомаҡтар менән түбәндәге һынау үткәргән. Ситлеккә, баҫҡаң, ашарға ем бирә торған педаль ҡуйғандар. Был педаль электр селтәренә тоташтырылған булған - уға баҫҡанда электр тогы һуға икән. "Башлы" ҡомаҡтар тиҙ генә үҙҙәренең араһынан был педалгә баҫырға тейешле ҡомаҡтарҙы билдәләп ҡуйған. Был ҡомаҡтар ошо эште башҡарғандан һуң ғына "аҡһөйәктәрҙән" ҡалған аҙыкты ашарға тейеш булған. Бер аҙҙан ғалимдар "эрәмтамаҡтарҙы" - бер, "эшһөйәрҙәрҙе" айырым ситлектәргә ултыртҡан. Күп тә үтмәгән, был ике төркөмдә үҙҙәренең яңы "ялҡауҙары" һәм "эшлеклеләре" хасил булған...**

# БЕЛДЕКЛЕ БЕЛЕП ЭШЛӘР,

## йәки күп эшләүгә ҡарағанда кәрәген эшләү мөһимерәк



...Яңы XXI быуат Рәсәй халҡының көнитмешен, уйҙарын, талаптарын ҙур үҙгәрештәргә дусар итте. Кешелек йәмғиәте барлыҡҡа килгәндән бирле бындай һынылыш булмағандыр. Быуаттар буйы кеше үҙенең төп матди ихтыяждарын тәьмин итеү - нисек ашарға, эсергә, кейенергә, ҡайҙа йәшәргә тигән маҡсат менән ғүмер итте. Хәҙер маҡсаттар ҙа, ҡиммәттәр ҙә, ихтыяж да үҙгәрҙе. Халыҡтың күпселеге иртәгә нимә ашап-эсергә, кейергә, ҡайҙа йәшәргә һ.б. тигән проблемалар менән әллә ни ҡыҙыҡһынмай. Һәр ғаиләлә тиерлек булған автомобиль (хатта бер нисә), төрлө көнкүреш техникаһы йәшәү уңайлыҡтарын арттырҙы һәм тормошто еңеләйтте. Электән ауыр булып һаналған эштәр - бесән, утын әҙерләү, кер йыуыу ҙа техника иңенә йөкмәтелде. Колорадо ҡуңыҙы менән көрәш кенә күп ваҡытты ала. Ҡаланан ауылға тик ял итер өсөн генә ҡайтабыҙ. Салғы, балта, көрәкте танһыҡ өсөн генә тотабыҙ. Ауылдарҙа күптәр ҡалалағы һымаҡ уҡ уңайлыҡтарға эйә - газ, телефон, канализация, ванна, өйҙәге бәрәф ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара.

Был хәл, әлбиттә, күберәк һатыу мөмкинлеген сикләне. Шуға ла баҙар иҡтисады бизнес алдында яңы талаптар ҡуйҙы: кешене нисек итеп яңы тауарҙар һатып алырға мәжбүр итергә? Маркетинг тигән фәндең барлыҡҡа килеүе лә ошоноң менән бәйле. Һәм уйлап таптылар: тауарҙың хеҙмәт итеү ваҡытын кәметергә! Бер тапҡыр ҡулланыла торған шприцтар, стакан-тәрилкәләр, памперстар кеүек тауарҙарҙың киң таралыш алыуы ошонан килә лә инде. Хәҙерге технологиялар сифатлы "мәңгелек" тауарҙар етештерә ала, әммә был бизнес өсөн кәрәк түгел. Шунлыҡтан, аяҡ кейеме ике сезондан артыҡ хеҙмәт итергә тейеш түгел. XX быуат башында АҠШта бизнесмендарҙың "лампочка 1000 сәғәттән артыҡ хеҙмәт итергә тейеш түгел" тип, уҙара килешеп ҡуйғандары мәглүм. Уларҙың хәҙерге коллегалары ла ошо юлдан бара. 60-сы йылдарҙа туҙмай торған бостон туҡымаһы бар ине - хәҙер уның тураһында ишеткән дә юҡ. Күп тауарҙар ремонтлап булмаҫлыҡ итеп етештерелә: берәй микросхемаһы сафтан сыҡһа, ноутбукты йүнәтеп ыҙалағансы, яңыһын һатып алыу йәтешерәк, сөнки һәр модель өсөн чиптарҙы уникаль итеп эшләйҙәр - баҙарҙа таба алмаҫлыҡ итеп... Шул уҡ зарядлау ҡорамалдарын алып ҡарайыҡ. Һәр кәҫә телефонына уны айырым һатып алырға мәжбүрһең - уртаҡ штекер эшләп һатһаң, экология өсөн дә отошлораҡ та бит. Юҡ, кеше кәҫәһенә төшөр өсөн уныһын да төрләндереп һаталар.

Бизнес быны менән генә сикләнмәй. Кешегә кәрәкмәгән тауар һатырға тырыша.Тәү ҡарашҡа, был тауарҙың дизайны ылыҡтырғыс, ә һатып алып ҡайтҡас, ҡайҙа ҡуйырға белмәйһең - шешлек өсөн шыйыҡ төтөн, төрлө статуэткалар, фритюрница, шейкер, миксер - барыһы ла бер тапҡыр ҡулланыу өсөн генә. Яңыраҡ Владимир Жириновский Донецк халыҡ республикаһы етәксеһе Денис Пушилинга 175 мең һумлыҡ ручка бүләк итте. Был ручкаһың кемгә кәрәге булғандыр? Бизнес кешелә реклама ярҙамында яһалма ихтыяж барлыҡҡа килтерә: туктауһыҙ кәҫә телефонынан һөйләшеү өсөн ошо элементә компаниялары булышлығында барлыҡҡа килөләр. Фармацевтик фирмалар, кәрәкме-кәрәкмәйме, төрлөтөрлө дарыу ҡабул итергә, фабриканттар - көн һайын кейем алмаштырырға "мәжбүр итә". Кешене яңынан-яңы хәүефтәр менән ҡурҡытып, унан һаҡлаусы тауарҙар һатып алдыралар - нимәнән генә һаҡламайҙар: ҡауҡтан (шампунде лә көн һайын йыуырлыҡ итеп етештерәләр шикелле), унитаздағы микробтарҙан, төрлө электромагнит нурҙарынан... Төрлө телетапшырыуҙар ("Смак", "Тәмле"), бер яҡтан, кешене күберәк һәм тәмлерәк ашарға (һимерергә), ә икенсе яҡтан ("Жить здорово!", "Малахов+"), нисек ябығырға өйрәтә.

XX быуат тамамланғас, Ер шарында йәшәгән 6 миллиард кеше өсөн ата-бабаларыбыҙ хыялланған тормош барлыҡҡа килде: ауыр физик эште башлыса техника, автомат-роботтар, һис юғында, мигранттар атҡара. Иҡтисадсылар иҫәпләүе буйынса, бөгөн кешелек өсөн етерлек матди байлыкты етештереүгә эшсе ҡулдарҙың 6-7 проценты етә. Тағы 40-45 процентты ошо продуктты ҡулланыусыларға еткереү маҡсатында төрлө коммуникациялар өсөн кәрәк (сауҙа, финанс, идара, транспорт, элемтә һ.б.). Кешеләрҙең ҡалғаны ирекһеҙҙән эшһеҙ ҡалырға мәжбүр - 8-10 проценты рәсми эшһеҙ тип һанала, ә ҡалғандарының эшләгеһе лә килмәй, сөнки быны мәғәнәһе юҡ. Миллиардлап кеше буш ваҡытын ҡайҙа итергә белмәй йонсой. Кемдер туйып һикерә - төрлө социаль сирҙәргә (эске, наркомания) дусар була, кемдер булғанына шөкөр итеп, ата-әсәһенең елкәһендә йәшәй. Һуңғыларын ялҡау тип әйтергә лә тел әйләнмәй: уларҙың төп ихтыяждарын тәьмин итеү өсөн атаәсәһенең аҡсаһы етә, төрлө социаль фондтарҙан да аҡса килеп тора. Хәҙерге балалар вуз тамамлауға, ата-әсәһенең көсө менән машиналы, торлаҡлы була. Улар өсөн тормош маҡсаты бөтөнләй икенсе нәмәләләр - беҙҙеке һымаҡ матди байлыҡҡа ынтылыу түгелдер. Был кешеләргә лә, эш көнөн йәки аҙнаһын, мәҫәлән, ике тапҡырға ҡыҫҡартһаң, эш урыны табып булыр ине лә, әммә бизнес бер ҡасан да быға бармаясаҡ, сөнки ике тапҡырға эш хаҡын төшөрөү мөмкин түгел. Нисәмә йылдар инде дәүләт етәкселәренең йәштәрҙә эшсе профессияларға йәлеп итергә маташыуы бер ниндәй һөҙөмтә бирмәй, сөнки физик эштең мәғәнәһе юҡ. Шунлыҡтан, ялҡаулыкты әҙ эшләү менән тиңләү дөрөҫтән түгелдер - бөгөнгө шарттарҙа йәштәр тик кәрәген эшләүҙе хуп күрә. Минең фекеремсә, кешелек йәмғиәтенә лә ошо күренеш сит түгел - ялҡаулыҡ, "заман башҡа - заң башҡа" тигән һымаҡ, һәр осорға ғына хас үҙенсәлектәре менән айырыла. Кеше араһындағы ялҡауҙарҙың кимәле ваҡыт үтеү менән үҙгәрмәйҙер.

Боронғоларҙың "Ялҡаулығыңды юҡ итһәң, тамағыңды туҡ итерһең" тип әйткәне хәҙерге шарттарға тап килмәй башланы шикелле. Баҙар иҡтисады кешене аяныс хәлгә дусар итте. Ағас өсөн иң әсе яҙмыш - балта һабына әйләнеү, шуның һымаҡ, кеше лә - әҙер тауарҙарҙы сүплеккә әйләндереп торған машинаға әүерелде түгелме?..

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда БР Президенты ҡарамағында Эшҡыуарлыҡ буйынса координация советы ойошторолдо. Совет эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү стратегик йүнәлештәр, административ барьерҙарҙы кәметеү, эшҡыуарлыҡ климатын яҡшыртыу буйынса тәҡдим әҙерләйәсәк. Координация советы даими рәүештә, кәмендә айына ике тапҡыр асыҡ ултырыштарға йыйыласаҡ. Совет ҡарары кәңәш итеү ролен үтәйәсәк.

✓БР етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов граждандар мөрәжәғәттәрен ҡарау һөҙөмтәлелеген контролдә тотоу мәсьәләләре буйынса кәнәшмә үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, хәҙер граждандарҙы шәхси ҡабул итеүгә баҫым яһала. Шуға ярашлы, Президент Хакимиәте яңы эш итеү формаһын булдырҙы, йәғни бер үк ваҡытта бер нисә республика һәм федераль власть органдары етәкселәге ҡатнашлығында кинәйтелгән күсмә ҡабул итеүҙәр. Тәжрибә күрһәтеүенсә, ул кешеләр менән аралашыуҙың иң һөҙөмтәле формаһы.

✓Өфөлә эш сәфәре менән 2014-2015 йылдарҙа ШОС-та һәм 2015 йылда БРИКС берекмәһендә Рәсәй Федерацияһының рәйеслеген әҙерләү һәм тәьмин итеү буйынса Ойоштороу комитетының медицина тәьминәте буйынса эшсе төркөм ағзалары булды. Улар баш ҡалалағы бер нисә медицина учреждениеһында булды. Һөҙөмтәлә Федераль ойоштороу комитеты Өфө дауаханаларының 2015 йылда Өфөлә уҙасаҡ ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлекте юғары баһаланы.

✓Республика етәксеһе вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов Һамарҙа Волга буйы федераль округы субъекттары һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһындағы Янцзы йылғаһының юғары, урта ағымы төбәктәре етәкселәренең өсөнсө ултырышында сығыш яһап, Ҡытай провинциялары менән хеҙмәттәшлек итеү тураһында һөйләне. "Бөгөн Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән сауҙа күләме 700 миллион доллар тәшкил итә. Ҡытай Халыҡ Республикаһына 500 миллион долларлыҡ продукция тапшырабыҙ, Ҡытайҙан 200 миллион һумлыҡ тауар алабыҙ", тип билдәләне Рөстәм Зәки улы.

✓5 июлдә милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыуға арнап Салауат районы Малаяҙ ауылында "Салауат йыйыны" Республика фольклор байрамы үткәрелә.

**"Башинформ"дан.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# РӘСМИ ХӘБӘРҘӘР... сикләнәсәк

**Үткән аҙнала Өфө ҡала округы Советы депутаттары сираттағы ултырышта 2013 йылға бюджет үтәлешен раҫланы.**

Былтыр Өфө бюджетының килем өлөшө - 23,23, сығым өлөшө 23,48 миллиард һумға барып баҫҡан. Сығым өлөшөнөң артыуына юғарыраҡ баҫҡыстағы бюджеттарҙан бирелгән субвенциялар, башҡа өҫтәмә сығанаҡтарҙан ингән килем күләме булышлыҡ иткән. Үҙкилем күләменең артыуы һөҙөмтәһендә иҡтисадтың төрлө тармаҡтарында эш хаҡтары артҡан. Башҡа йылдарҙағы кеүек үк, бюджеттың сығым өлөшө социаль йүнәлешле булып, уның күп өлөшө мәғариф, торлаҡ-коммуналь хужалығы, һаулыҡ һаҡлау системаларын финанслауға киткән. Бындай үҙгәрештәр ҡала халҡының иғтибарынан ситтә ҡалмай һәм улар бюджет үтәлеше буйынса тыңлауҙарҙа ыңғай үҙгәрештәр булыуын белдергән.

Шулай уҡ депутаттар ҡала Уставына ла үҙгәрештәр индерҙе. Бындай эшмәкәрлек федераль ҡануниәт талаптарынан сығып алып барыла. 2005 йылда ҡабул ителгән документ быға сәбер нисә тапҡыр үҙгәртеүҙәргә дусар була. Әммә РФ Дәүләт Думаһы закондарға үҙгәрештәр индереү менән урындағы ҡануниәт тә үҙгәртеүҙе талап итә. Шул уҡ ваҡытта Уставҡа, халыҡ тәкдиме менән, федераль ҡануниәткә бәйләнеше булмаған үҙгәрештәр ҙә индерелгән. Мәҫәлән, "Вечерняя Уфа" гәзитенең баш мөхәррире Вячеслав Головтың тәкдиме менән хәҙер баш ҡала гәзитендә төрлө рәсми муниципаль норматив-хоҡуҡи акттарҙың бик мөһимдәре һәм әһәмиәтлеләре генә баҫыласаҡ. Быйыл яҙғыһын "Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙидаралыҡты ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында" Федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында" закон ҡабул ителеүе барлыҡ үҙидара органдарының вәкәләттәрен киңәйтә төштө. Был йәһәттән дә уставҡа үҙгәрештәр индереләсәк, әммә уға тиклем тыңлауҙар үткәрелеп, халыҡтың тәкдимдәре лә иҫәпкә алынырға тейеш.

Ултырышта депутаттар корпусының икенсе ярты йыллыҡҡа эш планы ла раҫланды. Уға ярашлы, алдағы алты айҙа 17 төп блокка бүленгән 60 сара уҙғарылырға тейеш. Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко белдереүенсә, план БР Президентының БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарына Мөрәжәғәтнамәһе положениеларынан сығып төҙөлгән.

Тормошобоҙға яңы технологиялар инеү - тәү сиратта халыҡтың көнкүрешен уңайлы итеүгә йүнәлтелергә тейешлеген иҫтә тотоп, торлаҡ алыуға мохтаждар исемлегендә тороусы категорияның хәҙер сираттаға тороп үҙенең яҙмышын асыҡлауы кәрәкмәй - уларҙы ҡала хакимиәтенең "Электрон сират" бүлегендә лә белергә мөмкин буласаҡ. Ошо хаҡтағы ҡарар ҙа депутаттарҙың раҫлауын алды. Элек бындай мәғлүмәт кеше шәхсән мөрәжәғәт иткәндә генә бирелә ине.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

КИЛЕШМӘЙЕМ!



# ҒҮМЕРҘӘР ҠЫЙЫЛА ҺАМАН

**Рәсәй халҡын эскелектән бер аҙ арындырыу ниәтендә дәүләт кимәлендә лә, йәмәғәтселек тарафынан да, ниһайәт, төрлө саралар күрелә. Республикабыҙ буйынса "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы төрлө акциялар, ярыштар ойоштороп, аңлатыу эштәре алып бара, уларҙың һөҙөмтәләре лә күҙгә салына башланы. Мәҫәлән, баш ҡала йәштәренең күп осраҡта спиртлы эсемлеккә йөгонмайынса күңел асыуын күреп һөйөнәбеҙ.**

Ошо күренештәрҙе барлап, ҡыуанырға ла өлгөрмәнем... ауылға ҡайтып, ҡот осҡос хәбәр ишетеп килдем. Ҡырын тейәргә яраткан бер ауылдашым ике ай өйөнә ҡайтмаған, яҙ еткәс, ҡарға бутҡаһына сығыусылар ауылдан ситтәге аҡланда уның үле кәүҙәһенә тап булған, эсеп бөтөп өлгөрмәгән араҡыһы эргәһендә ултырған...

Ғүмерҙәре эскелек арҡаһында ҡыйылған ауылдаштарым һаны кәмемәй. Алтмышлап өйҙән торған бәләкәй генә башҡорт ауылында хәмер арҡаһында теге донъяға күскәндәр, бөтөнләй буш тороп ҡалған өйҙәр һаны арткандан-арта. Ауылдағы берҙән-бер кибеткә һыра артынан килеүселәр аяғы өҙөлмәй, һатыусы үтескә бирмәй сығарып ебәрһә, 5-6 километр араны үтеп, күрше ауылға барып ҡайтырға ла йыбанмай ҡайһы берәүҙәре. Йәштәргә кире өлгө күрһәтеп, "йәшел йылан" ҡолона әйләнгән ололар ҙа пенсияһын алыу менән кибеткә юллана. Яҡындарының ғүмере нисек аяныслы өҙөлөүен күрә йөрөһәләр ҙә, фәһем алыу, тәүбәгә килеү урынына эскелек һаҙлығына тағы ла тәрәнерәк баталар. Урындағы полиция хеҙмәткәре әйтеүенсә, закон буйынса, ошондай ғаиләләр йәшәгән өйгә йәмәғәт ойошмалары ағзалары, ауылдың айыҡ кешеләре инеп, әрләп, өгөт-нәсихәт уҡып сығырға ла тейеш түгел, имеш. Ә уларҙың эскегә һалышыуын күҙәтергә, үле кәүҙәләрен урмандан табып алып ҡайтырға рөхсәт ителәме икән һуң?..

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АҢ БУЛ, КЕШЕ!

# СИР ЙОҠТОРА КҮРМӘ

**Республикабыҙҙа 5 ай эсендә 1200 кешелә ВИЧ табылған - был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 20 процентҡа күберәк.**

- Һуңғы өс йылда бөтөн осраҡтарҙың күпселеге, йәғни 60 проценты, енси юл менән таралһа, һуңғы осорҙа вирусты ҡан аша (48 процент), йәғни наркотиктар ҡаҙағанда йоҡтороу осраҡтары йышайҙы,- тине СПИД һәм йоғошло сирҙәрҙе иҫкәртеү һәм уға ҡаршы көрәш буйынса Республика үҙәгенең баш табибы Рафаэль Яппаров.

Бөгөн 14 178 ВИЧ инфекциялы кеше иҫәптә тора. Беҙҙең республика был сир менән ауырыусылар һаны буйынса 18-се урында. Ырымбур, Силәбе, Пермдә ундайҙар иҫәбе бер ярым тапҡырға артығыраҡ.

Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Күмертау, Нефтекама ҡалалары һәм Мәләүез, Ишембай, Иглин, Архангел, Әлшәй райондары ВИЧ йоҡтороусылар һаны буйынса рекордсмендар тип әйтергә була. Быйыл республикала СПИД-ты иҫкәртеү һәм уға ҡаршы көрәшкә 4 млн һум аҡса бүлендe. Бер сирле дәүләткә йылына 30 мендән алып 100 меңгә тиклем барып төшә.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ЭСКЕЛЕККӘ СИКЛӘҮҘӘР

**Өфө ҡала Советы депутаттары менән параллель рәүештә тигәндәй, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары пленар ултырышта Сәнәғәт, инновацион үҫеш һәм эшҡыуарлыҡ буйынса комитет индергән "Башҡортостан Республикаһында этил спирты, алкоголь һәм составында спирт булған продукция етештереү өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү тураһында" Башҡортостан Республикаһы законына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте.**

Федераль ҡануниәткә ярашлы, субъекттарҙың дәүләт власы органдары алкоголь продукцияһын һатыу ваҡытына, урынына, шарттарына өҫтәмә сикләүҙәр индерә, шул иҫәптән тулыһынса тыя ала. Шул уҡ ваҡытта урындарҙа өҫтәмә сикләүҙәр индереүҙә ҡулланыу өсөн аныҡ критерийҙар юҡ.

Закон проекты иһә республика ауылдары территорияһында алкоголь продукцияһын һатыуҙы сикләүҙең процедураһын билдәләүҙе тәҡдим итә. Йәғни закон проектында аҡҡа ҡара менән ауыл халҡының фекерен иҫәпкә алып, муниципаль берәмектәрҙең тейешле ҡарары менән нығытылған мөрәжәғәте нигеҙендә спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйыу мөмкинлеге яҙылған. Был фекер граждандарҙан һорау алыу, граждандар йыйылышы, халыҡ менән осрашыуҙарҙа асыҡланырға тейеш.

БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Сәнәғәт, инновацион үҫеш һәм эшҡыуарлыҡ буйынса комитеты рәйесе Рәшит Хәйруллин белдереүенсә, проекты әҙерләүгә халыҡтан килгән мөрәжәғәттәр этәргес булған. Депутат әйтеүенсә, был тотош республика территорияһында алкоголь һатыуҙы тыйыуҙы аңлатмай. Әммә һәр урында халыҡ ҡарар итһә, Башҡортостан алкоголһеҙ республикаға әйләнеүе лә ихтимал.

Бындай тәжрибә Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә ҡулланыла ла инде. Хәҙер иһә закон проектының икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа ҡабул ителеүен көтөргә генә ҡала.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә 21-24 октябрҙә XIV Рәсәй энергетика форумы үтәсәк. Уның төп темаһы - "йәшел энергетика". Форумды Башҡортостан Хөкүмәте һәм Рәсәй Энергетика министрлығы ярҙамында Башҡортостан күргәҙмә компанияһы ойоштора.

✓Ауыл хужалығы сәсеүлектәрендә, болондарҙа һәм көтөүлектәрҙә ҡара сиреткәләрҙең киң таралыуы менән бәйле республиканың Учалы һәм Йылайыр районларында ғәҙәттән тыш режим индерелде. Бынан алда ғәҙәттән тыш режим Баймаҡ һәм Әбйәлил райондарында индерелгәйне. Республикала ҡороҡҡостар бөтәһе 45 меңдән ашыу гектарҙы биләп алған. Ғәҙәттән тыш хәл режимы махсус бойороҡҡа тиклем һаҡланасаҡ.

✓Республика башлығы Рөстәм Хәмитов үҙенең Указы менән Рәфит Йәғәфәровты Башҡортостан Республикаһының ауыл хужалығы министры урынбаҫары итеп тәғәйенләне. Рәфит Барлыбай улы Йәғәфәров 1969 йылда Ейәнсура районында тыуған. Башҡорт дәүләт аграр университетын һәм БР Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған. 2012 йылдан алып әлегә тиклем Башҡортостан Республикаһының ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары булып эшләгән.

✓Башҡортостан Республикаһы Милли симфоник оркестры директоры вазифаһын башҡарыусы итеп республиканың атҡаҙанған артисы, коллектив концертмейстеры Алексей Воронин тәғәйенләнде. Оркестрҙың элекке директоры Владимир Рихтер хаҡлы ялға китте.

✓12 июлдә Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылында БР Мәҙәниәт министрлығы, Бөрйән районы хакимиәте, Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге "Башҡорт балы - Бөрйән даны" этник фестивале үткәрә. Сара сиктәрендә баллы ризыҡтар, оҫталар, этнографик күргәҙмәләр ойоштороla, "Курайсы", "Арғымаҡ", "Уралтау" һәм Тыва, Алтай этник төркөмдәре сығыш яһай. Солоҡ эшләүселәр конкурсы, умартасылар ярыштары төрлө халыҡ уйындары ла күрһәтеләсәк.

✓Айҙың һәр икенсе һәм дүртенсе дүшәмбе көндәрендә Өфөнөң "Родина" кинотеатры өлкән быуын кешеләре өсөн бушлай киносеансы ойоштора. 7 һәм 21 июлдә көндөҙгө беренсе яртыла пенсионерҙар "Знак Зорро" һәм "Ничего святого" фильмдарын ҡарай аласаҡ.

УЙЛЫҒА - УЙ

**Ошо көндәрҙә баш ҡалала Салауат районында тыуып үҫкән яҡташтарҙың осрашыуы булып уҙҙы. Сара "Салауаттар" ойошмаһының барлыҡҡа килеүенең 10 йыллығына һәм милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуыуына 260 йыл тулыуға арналғайны. Кисә район хакимиәте вәкилдәренең, Өфөлә йәшәүсе яҡташтарыбыҙҙың сығыштары һәм концерт номерҙары менән аралашып барҙы. Ойошманың етәксеһе, медицина фәндәре кандидаты Иштимер Хурамшин үҙенең сығышында бер-беребеҙгә ярҙам итергә тырышырға һәм һәләтле, билдәле шәхестәребеҙҙең исемдәрен пропагандалау буйынса эшләргә тейешлегебеҙҙе һыҙыҡ өҫтөнә алып: "Һуңғы йылдарҙа Зәки Вәлидиҙе, Салауат Юлаевты ҡараларға маташыусыларҙан уларҙың яҡты исемдәрен яҡлайыҡ, һаҡлайыҡ һәм күтәрәйек!" - тине.**

# ЯҠЛАЙЫҠ ҺӘМ ҺАҠЛАЙЫҠ!



А.А. Кузнецовтың "Салауаттан һорау алыу" картинаһы.

Халыҡ-ара Информатика академияһы академигы, техник фәндәр докторы Раян Вахитов иһә: "Малаяҙҙағы Салауат Юлаев музейы алыҫ булыу сәбәпле, республикаға килгән ҡунаҡтар уның менән таныша алмай. Шуға Өфөлә уның филиалын булдырыу кәрәк. Конгресс-холл төҙөлөшө башҡорт милли-мәҙәни үҙәге булараҡ башланғайны, ул Салауат Юлаев һәйкәле янында, шуға күрә лә музей филиалын тап ошо йортта ойоштороу яҡшы булыр ине", - тигән бик урынлы фекер әйтте. Әйткәндәй, ошо һәм башҡа тәҡдимдәре менән ул БР Президенты хакимиәтендә булған һәм Аҡ йорт вәкилдәре был мәсьәлә буйынса уйларға вәғәҙә иткән. Ә вәғәҙә - иман.

Милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың юбилейы быйылғы Мәҙәниәт йылы менән тап килгәс, ҡайһы бер фекерҙәрем менән дә уртаҡлашырға булдым. 5 июлдә Салауат районында уҙасаҡ "Салауат көндәре"н Салауаттың рухына бағышлап ҡорбан салыу һәм күмәкләп, барлыҡ майҙан менән бергәләп доға уҡыуҙан башлаһаҡ, ҡасандыр илебеҙ өсөн барлыҡ һуғыштарҙа ла ҡаһармандарса алышып, шәһит булған меңәрләгән батырыбыҙ һәм Салауат менән Юлайҙың рухтары ла шат булыр ине. Мәҫәлән, Төркиәлә иртәнге намаҙға бөтәһе лә мәсеткә йыйыла, намаҙҙан һуң имам-хатип илгә тыныслыҡ, бәрәкәт һорап Аллаһҡа доға ҡыла. Шул ваҡытта меңәрләгән төрөк мәсеттәргә һыймай, урамдар тулып, ҡулдарын һонған килеш, күмәкләп "Амин, амин" тип торалар. Уларҙың дәррәү тауышы йыһанға хәтле яңғырап торған һымаҡ. Шул саҡ уларҙың ниндәй берҙәм, ныҡ иманлы милләт булыуына, бергәләп ихлас ялбарған доғалары ысынлап та ҡабул ҡылынасағына ышанаһың.

Икенсенән, бар ғүмерен Салауатҡа арнаған шәхес, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Тархан Сәғит улы Заһиҙуллинға (хәҙер мәрхүм инде) Салауат Юлаев ордены бирергә кәрәк. Ул Рәсәйҙә, Башҡортостанда үҙ көсө менән Салауат Юлаевҡа Әлкә ауылында музей асты, батырҙың портреттарын төшөрҙө, уның яҙмышын өйрәнеүгә күп көс һалды. Уның картиналар серияһы Әлкәләге, Малаяҙҙағы музейҙарҙы биҙәп тора. Салауат эҙҙәре буйлап туристик маршрут ойоштороу ҙа уның фекере ине. Башҡорттарҙың беренсе ҡоролтайында "Салауат Юлаев" орденын булдырырға кәрәк", тигән идеяны ул тәҡдим иткәйне. Орден да булдырылды, әммә уның ғүмер буйы түккән көсөн баһалап, үҙенә генә ул бирелмәне, әммә был наградаға иң беренсе булып фәҡәт ул ғына лайыҡ шәхес ине. Салауат районы хакимиәте һәм йәмәғәтселек был хатаны төҙәтеп, эште аҙағынаса еткерер, ғәҙеллек тантана итер, тип ышанғы килә.

Тағы ла шул: Салауат Юлаевҡа арналған тамашаларҙы фәҡәт уның тыуған көнө ваҡытында йәки юбилей йылдарында ғына уҙғарырға тимәгән. Мәҫәлән, мәктәптәрҙә һәр йыл Салауат Юлаевҡа арнап шиғриәт, һүрәт төшөрөү, инша яҙыу конкурстары уҙғарып тороу Салауат рухын тәрбиәләргә ярҙам итер ине. Салауат Юлаев тураһында рухлы башҡорт киноһы төшөрөләренә халыҡ әле лә өмөтләнә...

Мәҙәниәт йылында тағы бер темаға ҡағылып китеү кәрәк булыр, тип иҫәпләйем. Беҙ үҙебеҙҙең милләттән сыҡҡан олуғ шәхестәребеҙҙең исемен башҡа халыҡтар иғтибарына ла еткерергә тейешбеҙ. Мәҫәлән, Әйле ырыуы башҡорто, "Ҡисса-и Йософ" поэмаһының авторы Ҡол Ғәлигә Татарстанда "Болғар-татар шиғриәтенә нигеҙ һалыусы болғар шағиры" тип, 2005 йылда һәйкәл асылды. Уға арнап, әллә күпме хеҙмәттәр яҙҙылар. Был ғәмәлдәр, әлбиттә, бер яҡтан, һәйбәт. Икенсе яҡтан ҡарағанда, был эштәр, тәү сиратта, фәҡәт беҙҙә эшләнергә тейеш ине. Тажетдин Ялсығолов үҙенең "Тарих нама-и болғар" китабындағы шәжәрәһендә Ҡол Ғәлиҙең Әйле ырыуы башҡорто икәнлеген асыҡ күрһәткән. Шуға ла милләттәшебеҙгә, башҡорт халҡының бөйөк шағирына, әйлеләр күпләп йәшәгән төньяҡ-көнсығыш райондарының береһендә (Салауат, Дыуан, Мәсетле, Ҡыйғы райондарының) һәм Өфөлә һәйкәл ҡуйыу мотлаҡ кәрәк. Шулай уҡ республикала ла уның тормош юлы, ижадына арналған хеҙмәттәр яҙылһа, яҡшы булыр ине.

Әйе, беҙ милли батырыбыҙ, Салауатыбыҙ менән ғорурланабыҙ, уның нәҫелдәше, яҡташтары булыуыбыҙ менән бәхетлебеҙ һәм йөрәктәребеҙҙә Салауат рухы һәр ваҡыт маяҡ булып тора. Әйҙәгеҙ, уның һәм яуҙаштарының исемдәрен доғаларыбыҙҙан ҡалдырмайыҡ, рухтары шат булһын!

**Фәнирә ҒАЙСИНА,**
**РФ һәм БР Журналистар союзы ағзаһы.**

КӨН ҠАҘАҒЫ

# УКРАИНАЛА...
## ете көн "тыныслыҡ"

**Украинала барған хәлдәр донъя йәмәғәтселегенең иғтибар үҙәгендә ҡалыуын дауам итә. Ярты йыл элек Киевтағы тыныс протестан башланған ваҡиғалар бөгөн ҡуйырып, граждандар һуғышына әүерелде. Кисәге күршеләр бер-береһенә мылтыҡ тоҫҡай, ҡалалар утҡа тотола, халыҡ тыуып үҫкән ерҙәренән ҡасып китеп, сит тарафтарҙа һыйыныр мөйөш эҙләй.**

Яңы һайланған Президент Петр Порошенко үткән аҙнала Украина армияһы тарафынан алып барылған хәрби бәрелештәрҙе туҡтатып торорға теләүен белдереп сығыш яһаны. Ошо ҡыҫҡа тынлыҡ ваҡытында власҡа ҡаршы көрәшеүселәр ҡоралдарын ташларға тейеш, ә теләктәре булғандар илдән сығып китеү мөмкинлеге аласаҡ, тип белдерҙе ул. Ләкин шул уҡ ваҡытта хәлдәрҙе тыныс юл менән хәл итеү планы тормошҡа ашмаһа (был юл "А" билдәһе аҫтында), власть икенсе, йәғни "В" планына ярашлы эш итәсәк, икәнлегенә баҫым яһаны ил башлығы. Халыҡта "Шоколад батшаһы" тип йөрөтөлгән Петр Порошенко икенсе ысулдың асылын асыҡлауҙы кәрәкле тапманы. Шуға күрә халыҡтың тағы ла нығыраҡ һағайыуы һәм иртәгәһе көнгә хәүеф менән ҡарауы көсәйҙе генә. Етмәһә, һайланғандан һуң үткән аҙ генә ваҡыт эсендә лә президенттың һүҙе башҡарған эшенән айырыла икәнен дә аңлап өлгөрҙө халыҡ. Шуға күрә Украина халҡының Порошенко ауыҙынан сыҡҡан бер һүҙгә лә ышанмауына аптырайһы түгел.

Үҙҙәрен айырым дәүләт тип иғлан итеүсе төбәктәрҙең башлыҡтары власть вәкилдәре менән осрашып һөйләшеүҙәр башланы. Ләкин был һөйләшеүҙәр өсөн билдәләнгән 7 көндөң әлегә тиклем булған ваҡиғаларҙың эҙемтәләрен бөтөрөү һәм илдә тотороҡлоҡ булдырыу өсөн бик әҙ ваҡыт икәнен барыһы ла яҡшы аңлай. Шулай ҙа ике яҡтың бер-береһен ишетеренә һәм ҡан ҡойошто туҡтатырына өмөт итке килә. Ләкин был өмөт бик сибек, сөнки Петр Порошенкоға көнбайыштан ниндәй юл менән булһа ла ваҡиғаларҙы ҡуйыртырға һәм ил эсендә барған ҡаршылыҡтарға Рәсәйҙе йәлеп итеү бурысы ҡуйылған. Бының шулай икәнен Рәсәй консуллығына һөжүм итеү, сик буйы пунктын миномет утына тотоу, "Рәсәй" телевизион каналы журналистарын үлтереү асыҡ күрһәтә. Барлыҡ был хәлдәрҙе күреп-белеп торған ҡайһы бер рәсәйлеләр түҙемлек һәм тыныслыҡ һаҡламаҫҡа, Украинаны хәрби көстәр ярҙамында "урынына ултыртырға" саҡыра. Ләкин Рәсәй армияһы тарафынан бер генә тапҡыр яңғыраған мылтыҡ тауышы ла эште олоға ебәрәсәген Рәсәй етәксеһе яҡшы аңлай. "Украиналағы ваҡиғаларҙы хәрби көс ҡулланмайынса, тыныс юл менән хәл итеү мөмкинлегенә ышанам", ти Владимир Путин. Уның һәм башҡа миллионлаған Украина халҡының ышанысы аҡланырмы - ваҡыт күрһәтер.

**Наҙгөл САФУАНОВА.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Аденоидтар

**Аденоидтар - йотҡолоҡ тәнгәлендәге биҙҙәрҙең үҫеүенән килгән ябай шеш.**

❖ Иртәле-кисле 0,5 литр кәзә һөтө эсергә. Терапевтик эффекты раҫланған.

❖ 2 өлөш - сөгөлдөр һуты, 1 өлөш - бал. Тымау ваҡытында көнөнә 4-5 тапҡыр танауға 5-6 тамсы тамыҙырға. Танауҙағы аденоидтар ваҡытында балаларға файҙалы.

❖ Йоҡлар алдынан таныуҙы, тамаҡты тоҙ йәки аш содаһы менән сайҡарға.

❖ 1-2 тамсы һыуыҡ һыу эсеп, тамаҡты сыныҡтырырға.

### Аллергия

❖ 1 ҡалаҡ әремде ярты литр һыуҙа ул яртыһына ҡалғансы ҡайнатырға. Ашағандан һуң, көнөнә 2-3 тапҡыр 2-3 балғалаҡ эсергә.

❖ Аллергия мәлендә мумие ярҙам итә. 1 грамм мумиены 1 литр йылы һыуҙа иретергә. 1-3 йәшлек балаларға тәүлегенә бер тапҡыр иртән 50 мл, 8 йәштән өлкәндәргә 100 мл эсергә. Экзема ваҡытында 1 грамм мумиены 100 мг һыуҙа иретергә һәм һөртөргә. Мумие менән дауаланғанда тиҙ арала һөҙөмтәһе күренә, әммә дауалауҙы туҡтатып ҡуймағыҙ, 20 көн дауам итегеҙ. Авиценна дауалау курсын 20 көн буйына яҙ һәм көҙ үткәрергә кәңәш иткән.

Бронхиаль быума йүтәл ваҡытында мумиены татлы тамыр (солодка) төнәтмәһендә иретергә кәрәк. 500 мл төнәтмәгә 0,5 г мумие иретеп, 200 мл күләмендә иртән бер таҡыр эсергә. Төнәтмәне һыуытҡыста һаҡларға. 2 көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә.

❖ 5 ҡалаҡ ҡарағай энәләренә 2 ҡалаҡ әлморон емеше, 2 ҡалаҡ һуған ҡабығын 1 литр һыуға һалып, ҡайнау хәленән килтерергә. 10 минут талғын утта ҡайнатырға, төнгөләккә урап төнәтергә. Тәүлегенә 0,5-1,5 литр йылы килеш эсергә. 3 көндән һөҙөмтәһе күренә.

❖ 2 ҡалаҡ цикорий, һары мәтрүшкә, календула, эт дегәнәген 0,5 литр ҡайнар һыуҙа, термоста төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан эсергән.

❖ 1 литр ҡайнар һыуға бер ус фасоль ҡуҙағы һалырға, 3-5 минут ҡайнатырға, 1,5-2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр стакан эсергә. 2-3 көн эсендә балаларҙа ла, өлкәндәрҙә лә яҡшырыу күҙәтеләсәк.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Күмертау ҡалаһындағы учреждениеның үҙенең таҙартҡыс ҡоролмаһы юҡ. Шуға ла ауырыуҙарҙы беҙгә ебәрергә ҡарар иткәндәр. Беҙҙәге таҙартыу ҡоролмаһы - районда берҙән-бер ҡоролма.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ТУЙ ЙОЛАҺЫ

**Этнографик һәм фольклор материалдары күрһәтеүенсә, башҡорттарҙа туй йолаһы шартлы рәүештә өс өлөшкә - туйға тиклемге, туй, туйҙан һуңғы йолаларға бүленә.**

Балалар бәләкәй, сәңгелдәктә ятҡан саҡта йәрәшеү - бишек туйы тип атала. Йола, ғәҙәттә, ҡыҙҙың ата-әсәһе йортонда башҡарылған һәм табын йыйып байрам ителгән. Был йола балаға исем ҡушыу менән бергә тура килтерелгән. Ҡалым тураһында һөйләшкәс, ата-әсәләр бер һауыттан ҡымыҙ эскән, был йола бата тип йөртөлгән. Ошо мәлдән ҡыҙ кәләш булған һәм башҡаға кейәүгә сыға алмаған. Әммә уның атаһы ҡалымды кире ҡайтарып, был килешеүҙе боҙа алған. Йәрәшеү йолаһы балалар үҫкәс башҡарылһа, малай ҡыҙҙың ҡолағын тешләгән. Ҡайһы бер райондарҙа был йола һырға туй тип йөрөтөлгән. Был мәлгә малай атҡа менгән, ә ҡыҙ көйәнтә менән һыуға йөрөй башлаған булырға тейеш. Тарихи документтар күрһәтеүенсә, XIX - XX быуаттарҙа егеттәр 19-20 йәштә өйләнгән, ҡыҙҙарҙы 16-17, ҡайһы бер осраҡта 13-15 йәштә кейәүгә биргәндәр.

Егет яғы ҡыҙҙың йортона яусы ебәргәндән һуң, туй алдынан башҡарыла торған йолалар үткәрелә. Яусыны таяҡҡа таянған, бер балағы бөкләнгән булыуынан, һөйләшеүенән танығандар. Ҡыҙҙың ата-әсәһе риза булһа, яусыларҙы алсаҡ йөҙ менән ҡаршы ала. Ҡалым, туй тураһында һөйләшергә айырым килгәндәр. Ҡайһы бер райондарҙа ул таҫтамал сәйе (таҫтамал ҡотлау, тауар ҡотлау сәйе) тип атала, сөнки ике яҡ бер-берелә бүләктәр, шул иҫәптән, таҫтамал бирешкән. Һәр яҡ үҙ туғандарын айырым йыйып һөйләшкән, ул кәнәш туй (кәнәш ашы, һурпаһы) тип аталған. Ҡыҙ яғынан бер төркөм йәштәр егет яғына ҡалым алырға бара (мал алыу, мал алырға барыу, ҡоҙалыҡ). Был ваҡытта ҙур табын йыйыла, ҡаҙы, оса майы, дөйә үркәсе өҫтәлгән ҡуллама әҙерләнә. Мал ҡыҙҙың атаһына алып килеп тапшырылғас, туй алдынан башҡарыла торған йолалар тамамлана.

Туй ике этаптан торған: тәүҙә кәләш яғында туй үткән, күпмелер ваҡыттан һуң кейәү яғында ҡалын туй булған. Туйға кейәү туй сығымдарын ҡаплау өсөн өҫтәл аҡсаһы, ҡыҙҙың әсәһенә тун алып килгән. Йышыраҡ төлкө тиреһенән тегелгән был тун инә тун тип аталған һәм һөт хаҡына, тип бирелгән. Ҡыҙҙың үҙенә күлдәк йәки күлдәклек, аяҡ кейеме, биҙәүестәр бүләк ителгән. Кейәү ҡыҙға ниндәйҙер күләмдә аҡса ла бирергә тейеш булған, ул мәһәр тип аталған. Был аҡсалар ире теләге менән айырылышыу осрағы була ҡалһа йәки ире үлеп ҡалһа, ҡыҙға бирелгән. Егет яғынан ҡунаҡтар махсус арбала - аш арбаһында, ҡышын аш саnaһында килгән, үҙҙәре менән кейәү ашы (кейәү һандығы), мал килтергән.

Ҡоҙаларҙы ҡаршы алған ваҡытта ҡот алыу (ҡот сабыу, һебә сабыу) йолаһы башҡарылған. Ҡыҙыл тауар йәки яулыҡ киҫәге - ялаус бәхет һәм муллыҡ билдәһе булған. Уның бер осона көмөш тәңкә бәйләгәндәр. Ҡаршы алыусыларҙың береһенең терһәгенән өҫкәрәк бәйләнгән был ялауысты ҡоҙаларҙың береһе ҡыуып етеп, алырға тейеш булған.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҠАРАУЫЛМЫ?

# ҺАҠМАРЫМДЫ ҺАҠЛАУ...

## үҙебеҙҙе һаҡлау бит инде ул



**Беҙҙең Баймаҡ районының Темәс ауылы биләмәһе ауылдарын бер "ғәрәсәт" килеп баҫты. Темәс ауылында урынлашҡан Психо-неврологик интернатҡа ҡорһаҡ тифы (биҙгәк тотоуҙар, йөрәк-ҡан тамырҙары, нервылар һәм ашҡаҙан-эсәк системаһы зарарланыуы хас булған үткер йоғошло ауырыу) менән яфаланыусы 9 кешене килтереп урынлаштырыуҙары тураһындағы яңылыҡ йәшен тиҙлегендә бар республикаға таралып өлгөрҙө.**

Мәсьәләнең айышына килгәндә, хәлдәр былайыраҡ: әлеге көндә Темәс Психо-неврологик интернаты был сирлеләрҙе урынлаштырыу талаптарына яуап бирмәй. Беренсе талап нимә? Канализация һыуын таҙартыу ҡоролмаһы булыуы. Ҡоролма бар, әммә ул әле һаман файҙаланыуға тапшырылмаған.

Билдәле булыуынса, ҡорһаҡ тифы бактериялары ҡорһаҡ тифы менән ауырыған кешенең оло һәм кесе ярауы аша һыуға эләгеп, һау кешегә йоғоуы мөмкин. Ҡорһаҡ тифы таяҡсалары һыуҙа үрсей. Уларҙы бөжәктәр ҙә таратa.

Һаҡмар беҙҙең ауылдан 20-30 саҡрым төньяҡтараҡ ятҡан Әбйәлил районы Әхмәт ауылы янынан башланып, көньяҡҡа - Ырымбур далаларына ҡарай аға. Һарыҡташ ҡалаһы янында Уралға (Яйыҡҡа) ҡушыла. Артабан Яйыҡ Каспий диңгеҙенә ҡоя. Уйлап ҡараһаң, күпме ауылдар ошо йылғаның һыуын эсә, унда йыуына, һыу инә, мал-тыуар ҙа ошо йылғала һыуһын ҡандыра.

Шулай булғас, интернаттан ағып сыҡҡан бысраҡ һыу Һаҡмарға ағып төшөп, шул арҡала яман сир тарала ҡалһа, был беҙҙең районда ғына түгел, ә тотош бер төбәктә экологик һәләкәт тыуҙырыуы мөмкин. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса төрлө закон проекттары ҡабул ителә, ҡарарҙарға ҡул ҡуйыла, тик беҙҙең проблемабыҙҙы хәл итерлек сара күрелгәне юҡ. Тейешле талаптарға яуап бирмәгән учреждениенан был сирлеләр хәүефһеҙ урынға күсерелергә тейеш. Беҙҙә ҡапсыҡта һаҡлап булмай, ул ҡасан да булһа тишеп сығасаҡ. Беҙ күп нәмә лә һорамайбыҙ: бары тик һүҙебеҙ ишетелһен һәм халыҡтың хәүефһеҙлеген тәьмин итерлек сара күрелһен ине.

**Булат МАННАПОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Түбәнге Иҙрис ауылы.**

**Редакцияға ошондай йөкмәткеле хат килгәс, беҙ Темәс Психо-неврологик интернат директоры Хөснитдин Әминевҡа шылтыратып, был проблемаға аңлатма биреүен һораныҡ.**

- Башта шуға иғтибарҙы йүнәлтке килә: беҙгә килтерелгән 9 кеше - ҡорһаҡ тифы менән сирләүсе түгел, - тип һөйләне беҙгә Хөснитдин Хөснулла улы. - Уларҙы шартлы рәүештә генә был сир менән сирләүсе тип атап була. 9 кешенең 2-һендә генә ваҡыты-ваҡыты менән бактериялар бүленеүен күҙәтәбеҙ. Шулай ҙа барлыҡ сараларҙы иҫәпкә алып, беҙҙә эшләгән хеҙмәткәрҙәргә һәм халыҡҡа бер ниндәй ҡурҡыныс янамай, алдағы йылдарҙа ла янамаясаҡ, тип ныҡлы әйтә алам. Был пациенттар учреждение ихатаһы буйлап йөрөмәй, ә айырым палатала тотола. Уларҙы ҡараусы хеҙмәткәрҙәребеҙ сирҙән һаҡланыу препараттары, бер тапҡыр ҡулланыла торған кейемдәр, бирсәткәләр менән тәьмин ителгән. Әлбиттә, ул тиклем һаҡланыу талап ителмәйҙә, шулай ҙа һаҡланыуға киткән сығымдарҙы йәлләмәйбеҙ. Күптән түгел беҙҙә прокуратура, Экология министрлығы, Роспотребнадзор хеҙмәттәре тикшерҙе һәм бер ниндәй ҡағиҙә боҙоуҙар асыҡланманы.

Әлеге сирлеләрҙе ни өсөн Күмертау ҡалаһынан беҙгә килтерҙеләр? Сөнки Күмертау ҡалаһындағы учреждениеның үҙенең таҙартҡыс ҡоролмаһы юҡ. Шуға ла ауырыуҙарҙы беҙгә ебәрергә ҡарар иткәндәр. Беҙҙәге таҙартыу ҡоролмаһы - районда берҙән-бер ҡоролма һәм ул 2011 йылдың 21 сентябренән файҙаланыуға тапшырылған. Бөгөн канализация һыуҙарын таҙартыу саралары ошо ҡоролмала атҡарыла. Ике тапҡыр һыуға анализ үткәрелдe. Бактериологик күрһәткестәр буйынса ҡағиҙә боҙоуҙар табылманы. Бөтөн таҙартыу процестарын үткән һыу эсергә яраҡлы. Әйткәндәй, ҡайһы берәүҙәр раҫлағанса, беҙҙең учреждениеның канализация юлдары Һаҡмарға ағып төшә икән, тиген һүҙ дөрөҫлөккә тап килмәй. Ул һыу эстакада ысулы буйынса ер аҫтына китә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баштан уҡ халыҡҡа хәлде аңлатҡанда, бөгөн килтерелгән дәлилдәр менән тәүҙән үк уның күңелен тынысландырғанда, улар был тиклем борсолмаҫ та ине. Нисек кенә тиһәңдә, халыҡты ғәйепләп булмай, ул бөгөн үҙ проблемаларын үҙе хәл итергә мәжбүр. Бөгөн беҙ интернат директорынан күңелде тынысландырырлыҡ, хәүефһеҙ киләсәккә өмөт уятырлыҡ һүҙҙәр ишеттек ишетеүгә. Хөснитдин Хөснулла улы үҙ һүҙҙәренә тоғро ҡалыр, һаҡланыу сараларын ныҡлы контролдә тотор, тип ышанабыҙ. Ни генә тиһәң дә, был интернаттағы хәл-торош уның намыҫында бит.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ИМАНЛЫ ГӘЗИТ УЛ...

**"Киске Өфө" гәзитен бик күптән алдырам. Миңә был баҫма башҡорт халҡы тормошон, көнкүрешен төрлө яҡлап яҡтыртыуы менән оҡшай. Гәзитте үҙем генә уҡып, һалып ҡуймайым, ауыл мәсетенә лә алып барам.**

Әйтергә кәрәк, беҙҙең мәсеткә кеше күп йөрөй, һәр кем "Киске Өфө"нө яратып уҡый. Дин мәсьәләләренә ҡағылышлы бер генә мәҡәләне лә иғтибарҙан ситтә ҡалдырмайбыҙ. Йәштәргә дин һәм иман төшөнсәләренең асылын аңлатыу өлкәһендә эшләргә лә эшләргә әле беҙгә. Әйтәйек, иман - кешенең намыҫ дәрәжәһе күрһәткесе, әхлаҡ, илһөйәрлек ул. Әммә һәр кем дә ошо сифаттарға эйә булып бөтә алмай әле. Муллаһын, тип, баштарына сәллә урап йөрөүселәрҙең барыһы ла иманлы тип әйтә алмаған был заманда "Киске Өфө" гәзитенән ошо темаға уйланыуҙар, фекерҙәр уҡып, фәһем, аҡыл алып йәшәйбеҙ. Киләсәктә лә дин мәсьәләләрен ситтә ҡалдырмай, уның көнүҙәк проблемаларын яҡтыртып торорһоғоҙ, тиген теләктә ҡалам.

**Рафиҡ ШӘЙӘХМӘТОВ.**
**Әбйәлил районы Салауат ауылы.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Билдәле булған һунар төрҙәре араһында ҡош сөйөү башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында айырым урын алып тора. Был һунар тураһында күп легенда-риүәйәттәрҙә, йырҙарҙа, эпостарҙа һүрәтләнә, йәғни етеҙ ыласын, ҡеүәтле бөркөт һәм ҡанатлы ат күп кенә башҡорт әкиәттәрендә ҡаһарман батыр менән бергәләп яуызлыҡҡа ҡаршы көрәшә. Шулай уҡ тарихи сығанаҡтар ҙа йыртҡыс ҡоштар менән һунарҙың Башҡортостан территорияһында киң таралған булыуы хаҡында һөйләй. Башҡорт шәжәрәләрендә, мәҫәлән, юрматыларҙың, табындарҙың яҙмаларында ла ҡош сөйөү хаҡында телгә алына. Ишмөхәмәт кантон үҙе ҡош сөйөү оҫтаһы булараҡ дан алған кеше була. Халҡыбыҙҙың боронғо һунар төрө менән тарих фәндәре кандидаты Мирза Ғизетдин улы МУЛЛАҒОЛОВ таныштыра.**

# ҠОШ СӨЙӨП ҺУНАР ИТЕҮ



Башҡортостан - элек-электән ҡош сөйөү киң таралған төбәк булараҡ билдәлелек яулаған. Бәлки, халыҡтың тәбиғәтте ятратыуы, уның менән аңлашып йәшәүе, тәбиғәт балаһы булыуы быға сәбәпсе булғандыр. Кеше тәбиғәтте ятратмаһа, уны аңларға тырышмаһа һәм уға иғтибарлы булмаһа, ҡырағай ҡоштарҙы өйрәтеүҙә лә ҙур уңыштарға өлгәшә алмаҫ ине. С. Сомье исемле немец тикшеренеүсеһе үҙенең күҙәтеүҙәрендә "...башҡорттар ыласындарҙы һәм бөркөттәрҙе өйрәтеүҙә айырым һәләткә эйә", тип юҡҡа ғына яҙып ҡалдырмағандыр.

Ҡош сөйөү һунарының башҡорт халҡында киң таралыуы тәү ситта уларҙың хужалыҡ ихтыяждары менән аңлатыла. Улар бөркөт ярҙамында үҙҙәренең малдарын бүреләрҙән һаҡлаһа һәм тире алыу өсөн төлкө-ҡуяндарға һунар итһә, ыласын һәм ҡарсығалар ярҙамында үҙҙәрен ҡыр йәнлектәренең ите менән тәьмин иткән. Нуғай хандары һәм мырҙаларынан азат булып, үҙ ерҙәрен ҡайтарғандан һәм Рус дәүләте менән берләшкәндән һуң, башҡорттар Аҡ батшаға барып үҙҙәренең тәбиғи байлыҡтарын барлағанда: "Имеем места для зимовья, имеем места для кочевки... есть беркуты с гнездами...", - тип, һунар ҡоштарын да телгә алып китә.

Ҡош сөйөүҙең (соколиная охота) киң таралған осоро татар-монгол яуынан алып XIX быуат уртаһына тиклемге араға тура килә. Ҡош һунары менән шөғөлләнгән башҡорттар йыртҡыс ҡоштарҙы эйәләштереүҙә, өйрәтеүҙә һәм улар менән һунар итеүҙә ҙур тәжрибә туплай. Ошо үҙенсәлекте күп кенә Рәсәй (П. Рычков, П. Паллас, И. Лепехин, Э. Эверсман) һәм сит ил (С. Сомье, И. Де Бай, Ф. Ратцель) тикшеренеүсе-ғалимдары билдәләп китә. Башҡортостан Рәсәй составына ҡушылғас, башҡорт ерҙәренә күпләп урыҫ, татар, сыуаш, мари, мордва, удмурт крәҫтиәндәре күсеп килә башлай. Күсеп килгән халыҡ йоғонтоһонда башҡорттар ҙа ер эшкәртеү менән ныҡлап шөғөлләнә башлай, шул уҡ ваҡытта килмешәк крәҫтиәндәр ҙә башҡорттарҙың йәшәү рәүешенә иғтибар итә, бәғзеләрен үҙләштерә. Кемдәрелер, башҡорттар кеүек үк, йыртҡыс ҡоштар менән ҡырағай йәнлектәргә һунар итә башлай. Ә һунарсы ҡоштар менән уларҙы башҡорттар тәьмин итеп тора.

Күп сығанаҡтарҙа ҡош сөйөү таралған территория дала менән генә сикләнә. Ләкин XVIII быуатҡа тиклем ҡош һунарының таралыу ареалы киңерәк булған. Быны халыҡ ижады ҡомартҡылары менән бер рәттән, ҡайһы бер тикшеренеүселәрҙең хеҙмәттәре дәлилләй. Ғөмүмән алғанда, был һунар төрө башҡортта күп тармаҡлы кәсепселекте тәшкил итә. Берәүҙәр йыртҡыс ҡош ояларын эҙләһә, икенселәр уларҙы аулау менән мәшғүл була, өсөнсөләр ҡошсоҡтарҙы ҡулға эйәләтә, дүртенселәр уларҙы һунарға өйрәтә, бишенселәр иһә баҙарға сығарып, һунарсы ҡоштар менән сауҙа итә. Һунар менән шөғөлләнеүселәр ҙә күп була.

Һунар өсөн бөркөт, ыласын, ҡарсыға ҡулланыла. Өйрәктәрҙе аулау өсөн һаҙ көйгәнәген ҡулланыу тураһында ла мәғлүмәттәр бар. Бөркөттәр менән һунар артыҡ таралмай. Оло быуын кешеләре әйтеүе буйынса, әгәр бөркөт бүренең моронон тырнаҡтары менән ҡармап өлгөрмәһә, үҙе бүренең ҡорбанына әйләнә, йәки ҡаты яралана. Шуның өсөн дә башҡорттар был ҡошто ҡулға эйәләштергәндән һуң, ҡаҙаҡтарға, төркмәндәргә һата, ә үҙҙәре ыласын менән ҡарсығаларҙы хуп күрә.

Һуңғы быуаттарҙа башҡорттар ҡош сөйөү менән күп осраҡта күңел асыу өсөн генә шөғөлләнә башлай, ә көндәлек тормошта һунарҙың был төрөн артыҡ ҡулланып бармайҙар. Хужалыҡ төрҙәре һәм тәбиғәт шарттары үҙгәргән һайын, ыласын һунары яйлап һүнә башлай. Ер эшкәртеү, иген, йәшелсә культуралары сәсеү менән шөғөлләнеү башҡорттарҙың йәшәү рәүешен нигеҙенән үҙгәртә. Әгәр быға тиклем башҡорттар йәйҙәрен йәйләүҙәрҙә үткәрһә, әкренләп был ғәҙәттәренән йыраҡлаша баралар. Ә бит ҡош сөйөү тап йәйләүҙәрҙә йәшәгән халыҡҡа хас була. Ер эшкәртеү кешеләрҙең күп ваҡытын ала, шул сәбәпле һунарсылыҡ юҡҡа сыға бара һәм йыртҡыс ҡоштарҙы өйрәтеү, эйәләштереү менән батрактар ғына шөғөлләнеүен билдәләй ҡайһы бер ғалимдар.

Был һунар төрөнөң яйлап юҡҡа сыға барыуының икенсе сәбәбе - Башҡортостанды колониялаштырыу шарттарында урман майҙандарының кәмеүе. Урмандарҙың кәмеүе күпләп ҡырағай йәнлектәрҙең дә юҡҡа сығыуына килтерә. Ҡош сөйөүҙең юғалыуында кеше факторы ла һуңғы роль уйнамай. Ғәҙәттә, йәрминкәләрҙә бөркөттәргә һәм ыласындарға ҙур хаҡ ҡуйыла. Шул сәбәпле, уларҙы табыу, өйрәтеү, эйәләштереү кәсебе киңәйә башлай. Алдан билдәләнеүенсә, хәҙер инде башҡорттар ғына түгел, был төбәктә йәшәгән башҡа милләттәр ҙә бының менән ныҡлап шөғөлләнә, экологик проблема килеп тыуа. Ҡоштарҙы эйәләштереү менән шөғөлләнгән башҡорттарҙа нәҫелде дауам иттереү өсөн ояларҙа себеш ҡалдырыу тәртибе ныҡлы күҙәтелһә, хәҙер инде ҡомһоҙ кәсепселәр был тәртипте күҙәтмәй һәм ояларғы бөтә бәпкәләрҙе лә алып китеү күренеше массовый төҫ ала. Был да һунар ҡоштарының кәмеүенә килтерә. Күпмелер ваҡыттан был боронғо һунар төрө йәйләүгә сыҡҡан башҡорттар араһында ғына һаҡланып ҡала. Ыласын-бөркөттәр менән бергә ҡош сөйөү ҙә, ҡоштарҙы өйрәтеү, эйәләштереү оҫталығы ла юҡҡа сыға. Н.А. Зарудный үҙ хеҙмәтендә, экологик проблемаға ишаралап: "... йылғыр ҡоштарҙы һирәк килтерәләр. Килтерелгәндәре араһында ла матур, ҡыйыу бөркөттө күреп булмай", - тип яҙа.

Йыртҡыс ҡоштар менән һунар итеүҙе яҡшыраҡ күҙ алдына килтерер өсөн В. Зефировтың яҙғандарына мөрәжәғәт итәйек. "Соколиная охота в Башкирии" тигән хеҙмәтендә ул башҡорт старшинаһы саҡырыуы буйынса ҡош сөйөүҙә ҡатнашыуы хаҡында бәйән итә. Һунар ваҡытында Зефиров старшина һәм уның улдары менән бергә бик күп өйрәк һәм ҡыр ҡаҙҙары йөҙөп йөрөгән күл буйына килә. Старшина мылтыҡтарҙан атырға бойороҡ бирә, ҡурҡыныс тауышҡа бар ҡыр ҡоштары бер юлы күлдән күтәрелә. Ошоно ғына көткән һунарсылар үҙҙәренең төп ҡоралдарын эшкә йәлеп итә. "Ҡапыл дүрт ыласын һәм бөркөт... ҡурҡҡан өйөргә үлемесле уҡтай ташланды. Ыласындарҙың етеҙлеге һәм көсө мине һоҡландырҙы һәм шатландырҙы, ләкин бөркөт, был ҡанатлы бүре, үҙ хәрәкәттәрендә үтә уҫал ине... ул осоп барған килеш бер ҡаҙҙы ботарлағандан һуң, шунда уҡ икенсеһенә, өсөнсөһөнә, дүртенсеһенә йәбеште. Ыласындар төрлө яҡҡа таралған ҡоштар күтәүенә баш була алмауын күргәс, ул йәшен тиҙлегендә алыш яланын урап сыҡты, ҡоштарҙы ҡабаттан бер күтәүгә өйҙө һәм үҙенең ҡанһыҙ ләззәтләнеүен дауам итте; ҡорбандарын ҡанаттары менән һуғып төшөрҙө, тырнаҡтары менән өҙгөләне. Бер сәғәт тирәһе ваҡыттан эш бөткәйне инде. Һуңғы ҡорбан менән ыласындар ергә төштө, әммә бөркөт һаман да күкте байҡай ине әле..."

Был өҙөктә йыртҡыс ҡоштар менән һунарҙың башҡорттар өсөн классик варианты һүрәтләнә. Ниңәлер, ҡош сөйөү күп халыҡтарҙа таралған булһа ла, уның нисек итеп атҡарылыуы ентекләп бер ҡайҙа ла яҙылмаған. Зефировтың хеҙмәте был йәһәттән оло ҡиммәткә эйә. Ошо өҙөктә беҙ һәр ҡанатлы йыртҡыстың һунарҙағы "вазифаһы" һәм ҡорбанына ҡарата ниндәй ысул ҡулланыуын күрәбеҙ.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР
## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Ике яҡлы һәм дүрт яҡлы ҡыйыҡтар киң таралған. Ике яҡлы ҡыйыҡ торлаҡтың оҙон яғына төшөп тора, фронтондар бик йыш асыҡ ҡалдырыла йәки таҡта менән көпләнә. Әгәр торлаҡтың фронтоны урам яғына ҡарап торһа, урам яғы ғына көпләнә. Ҡайһы бер осраҡтарҙа ике яҡлы ҡыйыҡтарҙа ла, дүрт ҡыйыҡлыларҙағы кеүек, фронтондан ҙур булмаған вальма һәленеп тора. Дүрт яҡлы ҡыйыҡтар һирәгерәк осрай. Улар һәр саҡ ҡабырғалы тирмә формаһында була, торлаҡтың оҙон яғына төшөп торған яҡ өс мөйөшлө яҡҡа ҡарағанда ҙурыраҡ. Пирамида рәүешендәге ҡыйыҡ осратырға тура килмәне.

Ҡыйыҡ формаларынан тыш, уларҙың эшләнгән материалы ла айырым иғтибарға лайыҡ. Беренсенән, ул ҡыйыҡты урынлаштырыу ысулын асыҡлай. Икенсенән, ул ҡаралтыларҙың төрөн билдәләргә ярҙам итә һәм, ниһайәт, халыҡтың матди һәм мәҙәни кимәленең һәм урындағы географик шарттар менән бәйләнеш күрһәткесе булып тора.

XIX быуат һуңында башҡорттар ҡыйыҡ ябыу өсөн төрлө материал ҡуллана: транса, таҡта, һалам, кәҫ, туҙ, ҡамыш һәм уларҙың ҡатнашмалары. Бер генә төрлө материал менән өй ҡыйығын япҡандарын осратҡаным булманы. Бары тик таҡта ҡыйыҡтар һәр ерҙә лә осраны. XIX быуат һуңына ғына уларҙы транса ҡыйыҡтар алмаштыра. Бынан тыш, ҡыйыҡ ябыу өсөн йүкә ҡабығы, күгәмә ҡабыҡ, ҡарама ҡабығы, туҙ һ. б. ҡулланыла.

Башҡорттарҙың торлағында киң таралған тәҙрә тибы булып алты быяла ҡуйылырлыҡ итеп эшләнгән ҡыҫан тора. Рам бурағa яңаҡһыҙ ултыртыла, йөҙләктәр ҙә, тәҙрә ҡапҡасы ла ҡуйылмай. Быңдай 6 быялалы тәҙрәләр балсыҡ өйҙәрҙә, ябай бурамаларҙа, бүрәнә өйҙәрҙә лә була. Бик һирәк осраҡтарҙан тыш ҡына, башҡорттар тәҙрә рамдарын үҙҙәре эшләмәгәнлектән, торлаҡтарҙа башҡа төрлө, ҡайһы берҙә бик ҡатмарлы рамдар ҙа осрай. Тау башҡорттарында ҡыҫандар яңаҡтарға ултыртыла. Тәҙрә бер ҡат ҡына булғанлыҡтан, яңаҡтар һәм тәҙрә тупһаһы бик тар. Бик һирәк осраҡта рамдар бер бөтөн була. Тәҙрә рамдары яңаҡтарға ултыртылған осраҡтарҙа, ябай ғына йөҙләктәр ҙә ҡуйыла.

XVIII быуат һуңында башҡорттар тәҙрә уйымына мал ҡарынын, балыҡ тиреһен йәки туҡыманы майлап ҡуйғандар. XIX быуат һуңында инде барлыҡ ерҙәрҙә лә быяла тәҙрәләр барлыҡҡа килгәс, ҡарын тәҙрәләр бик һирәк кенә осраны.

Башҡорттарҙың торлағында тәҙрәләр һанында һәм уларҙың нисек уйылыуында бер ниндәй ҙә ҡағиҙә юҡ. Барыһы ла торлаҡ төрөнә, уның ҙурлығына һәм урындағы шарттарға бәйле. Улар торлаҡтың оҙон яғында ла, ҡыҫҡа яғында ла уйыла. Ғәҙәттә, ике тәҙрә урамға, икеһе ихатаға ҡарай. Әгәр йорт биш стеналы булып уның оҙон яғы урамға ҡарап торһа, ул яҡҡа өс йәки дүрт тәҙрә уйыла. Йыш ҡына тәҙрәләр ике стенала ғына була.

✓ *Ашау-эсеү туҡлыҡлы, мул һәм барыһының да күңеленә хуш килерлек итеп бешерелә. Беҙҙең меню көн һайын мотлаҡ башҡорт милли аштары һәм эсемлектәре индереп төҙөлә.*



# ТЫНЛЫҠТЫ "Башҡорт

**Беҙҙең тәнебеҙ генә түгел, йәнебеҙ ҙә ялға мохтаж. Был осраҡта сәйәхәткә сығып китеү иң ҡулайлы сара икәнен берәү ҙә инҡар итмәç, моғайын. Берәүҙәр сәйәхәт өсөн сит илдәрҙе һәм ҡитғаларҙы һайлаһа, икенселәр үҙебеҙҙең республиканың матур тәбиғәтендә ял итеп көс йыйыуҙы өçтөнөрәк күрә. Төбәктә туризмдың киң йәйелә барыуы һәм төрлө йүнәлештә эшләгән туҡталҡаларҙың артыуы ла ялды төрләндерергә мөмкинлек бирә. Бөгөнгө әңгәмәбеҙҙә Бөрйән районында "Башҡорт Иле" агротуристик хужалығын булдырыусы эшҡыуар Миңзиә Рауил ҡыҙы ХАТИПОВА менән ошо өлкәнең асылын аңларға тырышабыҙ, хәл ителәһе мәсьәләләрҙе барлайбыҙ, республикала туризмдың киләсәген күҙаллайбыҙ.**

## Сәйәхәтте яратыу - бала саҡтан

Сығышым менән Һамар өлкәһе Оло Чернигов районы Ҡыпсаҡ ауылынанмын. Тәбиғәтте, сәйәхәт итеүҙе бала саҡтан яраттым. Күңелемдә һәр ваҡыт быға булмаған ерҙәрҙе барып күреү, офоҡ артында йәшеренгән серле донъяны асыу теләге йәшәне. Бәләкәй саҡта ауылдың балалары йыйылып, тирә-яҡтағы һалмыларға (беҙҙең яҡта тауҙы шулай тип атайҙар) менеп, йылға буйында палаткалар ҡороп, үҙебеҙ тотҡан балыҡтан һурпа бешереп ашап, дөрләп янған усаҡ янында һөйләшеп ултырырға ярата инек. Бындай походтарға бигерәк тә малайҙар иркенләп йөрөнө, ә беҙҙе, ҡыҙҙарҙы, әллә ни эйәртеп, үҙҙәре янына бик яҡын ебәреп бармайҙар ине. Шуға ҡарамай, мин тәбиғәт ҡосағына барып, ундағы матурлыҡҡа һоҡланып, тынслыҡта ял итеп, мөғжизәле һиллектән көс йыйып ҡайтыуҙың әмәлен таба инем.

Сәйәхәт итергә яратыуым Һамар ҡалаһында уҡыған саҡта тағы ла нығынды. Университеттың беренсе курсында уҡ туризм өлкәһендә эшләгән "Офоҡ" клубын эҙләп таптым һәм унда ҡулыма диплом алғансы шөғөлләндем. "Офоҡ"та тәүҙә һыу туризмын "ауыҙлыҡланым", унан һуң тәбиғәтте йәйәү гиҙҙем, шулай уҡ ҡаяға үрмәләү буйынса ла ярайһы ғына тәжрибә тупланым. Ошо йылдарҙа клуб ағзалары менән күп ерҙәрҙә булдыҡ, төрлө төбәктең тәбиғәте менән таныштыҡ, халыҡтың йәшәйешен күрҙек. Тик ни өсөндөр Башҡортостан яҡтарына, Урал тауҙарына сәйәхәттәр ойошторолманы һәм миңә үҙемдең тарихи тыуған төйәгемде күрергә тура килмәне.

Ғаилә тормошо, бәләкәй балалар сәйәхәттәрҙе бер аҙға туҡтатты, ләкин туризм менән шөғөлләнеүгә булған ынтылышымды һүндерә алманы. Шуға күрә балалар бер аҙ үçкәс, үҙем уҡытҡан профессиональ училищела туристик клуб булдырҙым. Минең кеүек үк сәйәхәтте яратыусы студенттар менән бөтә Рәсәйҙе йөрөп сыҡтыҡ. Шулай уҡ Белоруссия, Украина, Төркмәнстан, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан ерҙәрен күрҙек, мәғрур Кавказ тауҙарына мендек. Ошо сәйәхәттәр барышында юлдарыбыҙ Башҡортостан аша ла үткәне булды, был яҡтарҙың матурлығын, гүзәллеген күрә йөрөнөм, ләкин төбәп кенә бер ҡасан да килергә насип булманы.

Башҡортостанға юлды миңә Ҡоролтай асты. 1990 йылдар башында беҙгә Башҡортостандан делегация килеп, Һамар башҡорттары ҡоролтайы ойошторҙо. Миңә, ҡоролтайҙың беренсе рәйесе булараҡ, Өфөгә йыш йөрөргә тура килде. Беренсе килеүемдә үк республиканың тәбиғәтенә ғүмерлеккә ғашиҡ булдым һәм һәр ваҡыт бында килергә ашҡынып торҙом. Ынтылышым шул тиклем көслө булғандыр инде, оҙаҡламай баш ҡалаға килеп төпләнеү өсөн яйы ла сыҡты: миңә бында эш тәҡдим иттеләр. Эшем буйынса республиканың төрлө райондарында, шул иçәптән Бөрйән яҡтарында йыш булырға тура килә ине. Бөрйән районын беренсе тапҡыр күргәндәге уйкисерештәрем әле булһа йөрәгемде семетеп-семетеп ала. Хоҙай кешене бик яратып яралтҡандыр, сөнки тормош көтөү өсөн уға ошондай гүзәллекте бүләк иткән. Ә "Башҡорт Иле" туристик базаһы урынлашҡан Ишдәүләт утарын донъяның иң матур урыны, тип билдәләйем.



*Ял итеү беҙҙә ҡыйбатҡа төшмәй. Мәçәлән, бер кешегә йәшәү, ашау-эсеү, мунса, төрлө экскурсион программалар менән бер тәүлек ял итеү 1500 һум буласаҡ. Шулай уҡ беҙҙә бер аҙнаға иçәпләнгән ял итеү программаһы ла бар. Ул осраҡта иһә ял итеүселәребеҙгә тағы ла киңерәк экскурсион программа тәҡдим итәбеҙ. Уның эсенә Әтек ауылына барыу, Баҙалы тауының иң бейек түбәһенә менеү, "Шүлгәнташ" һәм башҡа мәмерйәләр мөғжизәләрен ҡарау, Ағиҙелдән ағып төшөү һәм башҡалар бар.*

## "Башҡорт Иле"нә рәхим итегеҙ!

Район үҙәге Иçке Собханғолдан йылға буйлап 5 саҡрым түбәндә урынлашҡан Ишдәүләт утары Ағиҙелдең күркәм боролошонда, шау артыш менән ҡапланған бейек ҡаяға һыйынып ултырған. Халыҡ телендә Ябаҡ тип йөрөтөлгән утар элек ҙур булған, ләкин оло ташҡындан һуң халыҡ хәүефһеҙ урынға күскән. Әлеге ваҡытта унда ни бары дүрт хужалыҡ бар. Утарҙан артабан оло юл юҡ, ни бары йылға буйлап һуҡмаҡ ҡына китә. Был үҙе үк утарҙағы тәбиғәттең сафлығы, кеше ҡулының әҙ тейеүе хаҡында һөйләй. Уға саф һауаны, тынлыҡты, ҡунаҡсыллыҡты, изге күңеллелекте лә ҡушһаң, тормош ығы-зығыһынан ял итеү өсөн иң яҡшы урын килеп сыға. Бында һулыштар киңәйеп китә, йөрәк тыныслана, күңелдә аңлатып булмаçлыҡ һиллек тыуа, бар мәшәҡәттәр ҙә онотола. Һыу инеп, ҡояшта ҡыҙынырға яратыусыларға ҡойма артында Ағиҙел аға, тау үрҙәрен яулау уйы менән янғандар өсөн эргәлә өçкә ауырҙай тойолған мәғрур ҡаялар бар. Ҡала шау-шыуынан арып килгәндәр бигерәк тә ҡәнәғәт буласаҡ, сөнки беҙҙә тынлыҡтың үҙен ишетергә мөмкин. Туристик база асыу уйы менән янып йөрөгәндә юлдарымдың нәҡ ошо ергә алып килеүенә Хоҙайға рәхмәтлемен.

"Башҡорт Иле" агротуристик хужалығын 2008 йылдың яҙында төҙөй башланым һәм әлеге ваҡытта ул туристарҙы ҡабул итеүгә тулыһынса әҙер. Ял итеүселәр ҡарағайҙан эшләнгән, заманса йыһазландырылған һәм бөтә шарттар ҙа булдырылған 6 өйҙә йәшәй. Өйҙәрҙең иҙән-түбәләре, стеналары буяу менән буялмаған һәм йыуғандан һуң унда шул тиклем саф еç тора, хатта баштар әйләнә. Шулай уҡ улар өсөн яҡшы ике мунса, балалар һәм спорт майҙансыҡтары эшләй. Туристың, тәү сиратта, тамағы туҡ булырға тейеш. Кеше ниндәй генә матурлыҡ донъяһында йөрөмәһен, ниндәй генә тәбиғәт мөғжизәләрен күрмәһен, тамағы ас икән, бар ыңғай тәьçораттар ҙа юҡҡа сығасаҡ. Шуға күрә беҙ ашһыуға ҙур иғтибар бирәбеҙ. Ашау-эсеү туҡлыҡлы, мул һәм барыһының да күңеленә хуш килерлек итеп бешерелә. Беҙҙең меню көн һайын мотлаҡ башҡорт милли аштары һәм эсемлектәре - бишбармаҡ, кәзә һөтө һәм ҡымыҙы, өлөш, шулай уҡ ондан бешерелгән ашамлыҡтар - индереп төҙөлә. Ит, май-һөт, ҡатыҡ, ҡорот кеүек аҙыҡ-түлекте урындағы халыҡтан һатып алам. Минең менән даими хеҙмәттәшлек иткән кешеләр бар. Мәçәлән, ҡоротто Аçҡар ауылында йәшәүсе Мәрғиә апай бик оçта эшләй. Уның ыçлап яһаған ҡорото ауыҙҙа ирep тора. Майы ла юғары сифатлы, кешегә оҡшай. Аш-һыуҙы, күбеһенсә, асыҡ һауала ҙур ҡаҙандар аçып бешерәбеҙ. Был, беренсенән, аҙыҡты телде йоторлоҡ тәмле итә, икенсенән, газ булмаған ерҙә ныҡ ҡотҡара. Айырым осраҡтарҙа ял итеүселәрҙе мәтрүшкәле самауыр сәйе менән дә һыйлайым. Ләкин бер юлы 20-30 кеше ял иткән саҡта самауыр менән генә сәй еткереп булмай, шуға электр сәйнүгенә көн ҡала. Тағы ла буҙа эшләү уйы бар, ләкин уның өсөн эштең бар нескәлеген белгән махсус кеше кәрәк, сөнки бер үҙем барыһына ла өлгөрә алмаясаҡмын. Ә эште эшләгәс, еренә еткереп башҡарырға кәрәк. Буҙа эшләүгә әлегә тотонмауымдың тағы бер сәбәбе - барыһы ла буҙаны ҡабул итмәй һәм эсә һалып бармай. Шуға күрә был тәмле һәм туҡлыҡлы милли эсемлекте эсеү мәҙәниәтен үçтереү һәм үҙебеҙҙең халыҡ араһында ла, ял итеүселәрҙә лә популярлаштырыу мөһим.

Әлеге ваҡытта "Башҡорт Иле" туристик базаһы тулы көсөнә тик йәй миҙгелендә генә эшләй. Ә шул уҡ ваҡытта беҙҙә башҡа ваҡытта ла һәйбәт итеп ял итеп була. Мәçәлән, тәбиғәт ҡосағында Яңы йылды ҡаршылау һәр кемдең хәтерендә матур иçтәлек булып уйылып ҡаласағына шигем юҡ. Шулай уҡ тыуған көн, юбилей, туй һәм башҡа ғаилә байрамдарын да тәбиғәттә билдәләү шатлыҡлы ваҡиғаға йәм генә өçтәйәсәк. Ә яҙ-көҙ айҙарында "Башҡорт Иле"ндә ижад кешеләре үҙҙәренең әçәрҙәрен ижад итергә мөмкин. Иғтибарҙы бер нәмә лә бүлмәй, маҙаһыҙлап йөрөүсе кеше юҡ, матур тәбиғәт - әйҙә, рәхәтләнеп яҙ, һүрәт төшөр, илһамланып йырҙар ижад ит.

Ял итеү беҙҙә ҡыйбатҡа төшмәй. Мәçәлән, бер кешегә йәшәү, ашау-эсеү, мунса, төрлө экскурсион программалар менән бер тәүлек ял итеү 1500 һум буласаҡ. Шулай уҡ беҙҙә бер аҙнаға иçәпләнгән ял итеү программаһы ла бар. Ул осраҡта иһә ял итеүселәребеҙгә тағы ла киңерәк экскурсион программа тәҡдим итәбеҙ. Уның эсенә Әтек ауылына барыу, Баҙалы тауының иң бейек түбәһенә менеү, "Шүлгәнташ" һәм башҡа мәмерйәләр мөғжизәләрен ҡарау, Ағиҙелдән ағып төшөү һәм башҡалар бар. Шулай уҡ теләге булғандарға район мәҙәниәт йорто хеҙмәткәрҙәре "Һыу башлау" йолаһын да сәхнәләштереп күрһәтә. Мин ғаилә туризмына өçтөнлөк биреүсе булараҡ, бер-нисә бәләкәй бала менән килеүселәргә ташламалар ҙа яһайым. Ә 4 йәшкә тиклемге балалар өсөн бөтөнләй түләү ҡаралмаған.

Базаның эшмәкәрлеген мин үҙем нисек, ниндәй шарттарҙа ял иткем килә, шунан сығып ҡорам. Ваҡытында күп ерҙәрҙә булыуым һәм бихисап туристик базаларҙы күреүем бөгөнгө көндә ныҡ ярҙам итә, сөнки туристарҙың ялдарынан ҡәнәғәт булһындар өсөн нимә һәм нисек эшләргә кәрәклеген яҡшы аңлайым. "Башҡорт Иле"ндә, иң күбе, 30 кеше ял итергә мөмкин. Ошо һанды иң оптималь һанайым, сөнки артығыраҡ булһа, ял итеүселәр бер-береһенә ҡамасау була һәм ял минуттарының бәçе китә. Шулай уҡ база хеҙмәткәрҙәренең дә һәр кемгә иғтибары етмәйәсәк, хеҙмәтләндереүҙең сифаты ла зыян күрәсәк, ә былар бик мөһим мәлдәр.

Базаның ни өсөн "Башҡорт Иле" тип аталыуы менән ҡыҙыҡһыныусылар күп. Билдәле сәйәхәтсе Ибн Фаҙлан үҙенең яҙмаларында беҙҙең яҡтарҙы "Башҡорт Иле" тип яҙып ҡалдырған һәм туристик база

***✓ Был өлкәгә күберәк йәштәребеҙҙе ылыҡтырырға кәрәк. Уларҙағы көс, энергия, позитив фекерләү, заманса технологиялар менән дуҫ булыу, ауырлыҡтар алдында юғалып ҡалмау сифаты - барыһы ла уңышлы эшмәкәрлектең нигеҙе.***

асыу уйы башыма килгәс тә үк, уның исеме ошондай буласаҡ, тип ҡарар иттем. Башҡортостандың йөҙөк ҡашы Бөрйәндә, башҡорт халҡының ҡобайыр-легендалары төйәгендә, Урал батыр йөрөгән ерҙә урынлашҡан ял итеү урыны тик ошондай исем генә йөрөтөргә мөмкин, минеңсә. Исемде тик башҡортса ғына яҙам, сөнки тик туған телебеҙҙә генә уның тулы мәғәнәһе, айышы, йөкмәткеһе асыла кеүек. Был исем минең эшмәкәрлегемә аяҡ саласаҡ, тип белдереүселәр күп булды, ләкин яңғырауыҡлы исем артынан ҡыуып, мин үҙ булмышымдан баш тарта алмайым.

## Маҡсат һәм тырышлыҡ - уңыштың нигеҙе

Ниәтемде ысынбарлыҡ итеү өсөн күп көс түгергә тура килде, ләкин һөҙөмтә бар тырышлыҡты ла аҡланы. Иң беренсе ҙәрҙе күп ишетергә, гәзит биттәрендә баҫылған әңгәмәләрҙе күп уҡырға тура килде. Барыһы ла күп һәм оҫта һөйләй, ләкин анаҡ эш эшләгән кеше һирәк. Был йәһәттән дәүләттең ярҙамы бихисап конференция, семинарҙар ғына үткәреүгә генә ҡайтып ҡалырға тейеш түгел, минеңсә. Тәү сиратта, был эшмәкәрлекте үҙ иңдәренә алырға теләүсе энтузиастарға һүҙ ярҙамы менән бер рәттән, реаль, күҙгә күренгән эштәр башҡарып та ярҙам итеү фарыз. Бында һүҙ субсидия биреү, аҡса бүлеү хаҡында бармай, ә күберәген туристик базалар урынлашҡан йәки ойоштороорға теләгән яҡтарҙа инфраструктураны үҫтереүгә булышлыҡ итеүгә ҡайтып ҡала. Эшҡыуар үҙенең туристик базаһында һәйбәт шарттар булдырып, яҡшы хеҙмәтләндереү тәҡдим итеп тә, ул базаға барып етерлек һәйбәт юл булмаһа йәки ял итеүселәргә ҡамасаулаусы башҡа милләттәштеребеҙ арта. Ундайҙарға килегеҙ, эшләгеҙ, уйҙарығыҙҙы тормошҡа ашырығыҙ, тип өндәшкем килә. Был эшкә тотоноғрға теләүселәргә ярҙам итергә лә әҙермен.

Төбәктә туризмдың үҫеүе, нығыуы, етеҙ аҙымдар менән алға барыуы был эшмәкәрлек менән шөғөлләнеүсе эшҡыуарға ғына түгел, ә урындағы халыҡҡа ла файҙалы. Туристик туҡталҡаларҙың төҙөлөүе эш урындары барлыҡҡа килтерә, район бюджетын тулыландыра, инфраструктураның үҫеүенә булышлыҡ итә. Шулай уҡ халыҡ эшҡыуарға күмәртәләп һөт-майын тапшырырға йәки туристарға һатып ебәрергә мөмкин.

Туризмдың үҫеүенең кире яҡтары ла бар, әлбиттә: тәртипһеҙ туристарҙың тәбиғәтте бысратыуы, урмандарға зыян килтереүе, бесәнлектәрҙе тапауы, урындағы халыҡты бимазалауы мөмкин. Ләкин бөтә донъяла әүҙем үҫешкән туберәһенә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер, улар берҙәмдәр һәм ойошҡандар. Башҡортостандан ситтә йәшәү беҙҙе берләштерә, бер-беребеҙгә терәк-таяныс булырға, туған телебеҙгә, тарихыбыҙға иғтибарлыраҡ булырға этәрә, күрәһең. Һамар ҡалаһында башҡорт телен ишетһәм, тәндәрем земберләп китер ине. Әле Башҡортостанда йәшәгәс, сылтыр шишмә ағымындай башҡорт телмәрен ишетеү, аралашыу мөмкинлеге күберәк һәм мин быға шатланып бөтә алмайым. Тик барыбер, минеңсә, республикала, бигерәк тә Өфөлә, башҡорт теле әҙ яңғырай. Ни өсөндөр, туған телдәрен яҡшы белһәләр ҙә, урыҫ телендә аралашыуҙы хуп күрәләр. Урамда йәштәр балалары менән сит телдә һөйләшә, әбей-бабайҙар телдәрен вата-емерә урыҫса һупалай. "Ни өсөн рәхәтләнеп үҙебеҙҙең телдә һөйләшмәйһегеҙ?" тип һорағаным да бар. "Башҡорт телендә һөйләшкилеүсе башҡа милләт вәкилдәре ни өсөндөр мине "үҙҙәренеке" итергә тырыша. Ләкин мин үҙемдең башҡорт булыуыма баҫым яһаһам, мөнәсәбәт бөтөнләй үҙгәрә, һалҡыная, әле генә алдында йылмайыпкөлөп торған кеше бөтөнләй икенсе ҡиәфәткә керә. Был хәл минең башыма һыйып бөтмәй. Башҡорт йәшәгән ергә барып, "Башҡорт Иле" тип аталған туристик базаға ял итергә килеп, улар нимә көтә, нимә теләйҙер - аңламайым. Уйланым-уйланым да, шундай фекергә килдем: бындай ҡараштың булыуына беҙ үҙебеҙ ғәйепле. Үҙебеҙҙе тел менән дә, эш менән дә кәмһетергә бирмәһәк, башҡортҡа һүҙ тейҙерергә батырсылыҡ иткән һәр кешегә тейешле яуап ҡайтарырға өйрәнһәк - ҡараш та, мөнәсәбәт тә үҙгәрәсәк. Үҙ еребеҙҙә ҡайтарып һүҙ әйтергә ҡурҡабыҙ. Башҡаларҙы яҡлау түгел, үҙен яҡлап һүҙ әйтергә ҡурҡҡан милләтәштәребеҙ

# ИШЕТКӘН КИЛӘМЕ?


"Башҡорт Иле" ошондай күркәм тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан.

## Иле"нә кил!

ер мәсьәләһен хәл итеү оҙаҡҡа һуҙылды. Шулай уҡ эш барышында электр уты менән килеп тыуған мәсьәләләрҙе хәл итеү ҙә байтаҡ ваҡытты һәм көстө алды. Ләкин бер ниндәй кәртә лә, әгәр ҙә, бар күңелең менән ынтылған эшкә тотонғанһың икән, юлыңды яба алмай. Маҡсат һәм тырышлыҡ булғас, был бурысты ла атҡарып сыҡтым. Ғөмүмән, ҡайһы өлкәлә булһа ла ошо ике сифат уңыштың нигеҙе, тип һанайым. Әгәр ҙә килеп тыуған ауырлыҡтарҙан баҙап, алдыңа ҡуйған маҡсатыңдан тиҙ генә баш тартһаң һәм ялҡаулығыңа баш була алмаһаң - тормошта ниндәйҙер үрҙәргә артылыуың икеле.

Әлеге ваҡытта мине иң борсоғаны - утарға юлдың булмауы. Йәйгеһен, йылға бер аҙ һайығас, утарға кисеү, ә ҡышын Хоҙай Тәғәлә биргән күпер - боҙ аша йөрөйбөҙ. Ә яҙын-көҙөн бейек ҡаянан һалынған юл буйлап төшөргә кәрәк. Был юл хәүефле булыуы менән бер рәттән, алыҫ та. Шуға күрә район хакимиәте үҙ контроленә алған был мәсьәлә быйылдан да ҡалмай хәл ителер, тип ышанам.

## Беҙҙең өлкәлә конкуренция юҡ

Башҡортостанда туризм өлкәһендә конкурентлыҡ бөтөнләй юҡ. Тотош республикала туризм менән шөғөлләнгән эшҡыуарҙарҙы бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Минең Башҡортостанға килеүемә 10 йыл. Ошо ваҡыт эсендә туризмды үҫтереү мөһимлеген билдәләп һөйләнгән ялҡынлы телмәр мәшәҡәттәр булһа, эштәр алға китмәйәсәк. Туризмдың ныҡлап үҫеүе өсөн тағы бер шарт - был өлкәне ҡараған дәүләт органдарында тәбиғәтте яратҡан һәм аңлаған, сәйәхәтте үҙ иткән кешеләрҙең эшләүе. Әгәр ҙә кеше булмышы менән сәйәхәтсе булмаһа, сәйәхәт итеү уның йәшәйешенә әйләнмәһә, туризмды үҫтереү буйынса ул бер файҙалы эш тә башҡара алмаясаҡ.

Был өлкәгә күберәк йәштәребеҙҙе ылыҡтырырға кәрәк. Уларҙағы көс, энергия, позитив фекерләү, заманса технологиялар менән дуҫ булыу, ауырлыҡтар алдында юғалып ҡалмау сифаты - барыһы ла уңышлы эшмәкәрлектең нигеҙе. Яңыраҡ баш ҡалала туризмға бағышланған ҙур конференцияла башҡорттарҙың, айырыуса йәштәрҙең, күп булыуы мине ҡыуандырҙы. Тимәк, туризмға иғтибар көсәйә, уның менән шөғөлләнергә, был өлкәлә эшләргә теләүсе ризмды туҡтатыу мөмкин түгел, шуға күрә насар эҙемтәләрҙе кәметеү йәки бөтөнләй булдырмау өҫтөндә эшләргә кәрәк. Был йәһәттән нәҡ туристик базаларҙы күпләп үҫтереүгә иғтибар бирергә кәрәк. Бындай махсус урындарҙа бөтә нәмәгә күҙ-ҡолаҡ булырға мөмкин, ә ҡырағай туристарҙы контролдә тотоп булмай.

## Сит тел белеүеңдән ни фәтүә, туған телеңдә һөйләшмәһәң?

Башҡортостанда йәшәй башлағас, ике төбәктәге милләттәштәремдең ни тиклем берберенән айырылыуын аңланым. Был телдә лә, үҙҙәрен йәмғиәттә тотоуҙарында ла, ҡылыҡ-фиғелдәрендә лә сағыла. Беҙҙең Һамар өлкәһендә, ҡалаһында рух, башҡортлоҡ көслө. Һәр кем үҙенең башҡорт булыуы менән ғорурлана. Милләттәштәр һәр ваҡыт беркәнде башҡа милләт вәкилдәре яратмай бит", тигән яуап ишетеп ныҡ аптыраным. Ни өсөн беҙгә, үҙебеҙҙең өйөбөҙҙә, башҡа берәүҙең хуплауы, яратыуы һәм ниндәй телдә һөйләшергә кәрәклеген билдәләүе кәрәк һуң әле? Барыһы ла үҙебеҙҙән тора. Йәмғиәткә үҙеңде нисек күрһәтәһең, ҡабул итеү ҙә тейешенсә була. Әгәр ҙә үҙеңдең туған телеңдә һөйләшергә ояләһың икән, әллә күпме сит тел белеүеңдең бер фәтүәһе лә юҡ.

Һамарҙа бер башҡорт та үҙ теленән оялмай, һөйләшергә уңайһыҙланмай һәм тартынмай. Тирә-яҡтағылар ҙа беҙҙе, беҙҙең телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы һәм булмышыбыҙҙы ихтирам итә һәм нисек барбыҙ, шулай ҡабул итә. Һамарҙа башҡорттарға ҡараш бөтөнләй икенсе. Ә Башҡортостанда башҡа милләттең ерле халыҡҡа булған мөнәсәбәтен күреп, һәр саҡ ғәжәпләнәм. Бәләкәй генә миҫал. Базаға күп. Былай йәшәргә ярамай. Әлбиттә, мин һәр урында ирешеп-талашып йөрөргә кәрәк, тип әйтмәйем, ләкин үҙеңде, милләтәштәреңде яҡлай белергә кәрәк. Был, күптәр уйлағанса, милләтселек түгел, был - патриотлыҡ. Әгәр ҙә һәр беребеҙ "миңә теймәһәләр, миңә һүҙ әйтмәһәләр - булған" тип йәшәһә, артабан нимә булыр?

Беҙҙең башҡорт яҡшы күңелле, рәхимле, юғары эске этикаға эйә, әҙәпле, ирештипалаш яратмаған, ярҙамсыл халыҡ. Бер ҡасан да үҙебеҙҙең принциптарыбыҙҙы башҡаларға көсләп тағырға тырышмайбыҙ, күҙенә ҡарап бәреп әйтеп бармайбыҙ, кешенең күңелен китерлек ауыр һүҙҙәр әйтеүҙән тыйылабыҙ. Беҙ бик толерант булыуыбыҙ менән дә айырылып торабыҙ һәм ҡайһы берәүҙәр ошоно үҙ мәнфәғәттәрендә рәхәтләнеп ҡуллана. Быға сик ҡуйырға ваҡыт.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостан еренең гүзәллеген һәм үҙенсәлеген башҡаларға башҡорттан башҡа берәү ҙә бар тулылығында асып һала алмаясаҡ, сөнки уға был эштә ата-бабалары рухы ярҙам итә, туған тупрағы көс бирә, тарихы илһамландыра. Ә был ҡатмарлы, әммә бар йәһәттән дә ҡыҙыҡлы өлкәлә бөгөнгө әңгәмәсебеҙ кеүек үҙ эшен яратҡан һәм бар күңелен һалып башҡарған кешеләрҙең булыуы уны тағы ла йөкмәткелерәк итә. Шуға күрә, туризм эшҡыуарлығында милләттәштәребеҙҙең артыуын һәм республикаға сәйәхәтселәрҙе һәм ял итеүселәрҙе күберәк ылыҡтырыуҙарын теләргә генә ҡала.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**яҙып алды.**

✓ ***Балаларҙан екһенеп, тамам биҙә булып үҫте ҡыҙ. Шулар артынан таҙалап, йыуып-йышып, бишек бәүетеп үтте балалыҡ, үҫмерлек осоро. Бәләкәс туғандарын һәм әсәһен ошо етешмәгәнлектең, әрпешлектең сәбәпсеһе итеп күрҙе.***



Саҡ түҙҙе Асия. Бар сабырлығын төйнәп тотоп, көскә сыҙаны. Өйҙәгеләр менән хушлашып сығып, машинаға ултырғас та эсендә ажғырған ярһыуын баҫырға тырышып көсәнде. Тик бер ҡайнап сыҡҡан һарыу тиҙ генә һыуынырға теләмәне. Шартлап ярылып, сәсрәп, ян-яҡҡа сәселеп киткеһе килде. Йәнәшәһенә ауыҙын йыя алмаҫтан көлә-йылмая инеп ултырып, ҡуҙғалғас та күңелле көй ҡуйып ебәргән иренә яндыраһынан ҡарап ебәрҙе. Тик тегенеһе был ҡарашты күрмәне лә, тойманы ла. Юлға ҡарап, һаман да ниндәйҙер күтәренке илаһи тойғоларынан арына алмай, күҙҙәрен иркә нурландырып килә. Был ҡатынды тамам сығырынан сығарҙы:

- Тауышын яп! Былай ҙа баш ауыртты.

Тик ире ишетмәй әллә. Үҙ уйҙарына сумған. Асия ынтылып, көйҙө һүндереп үк ҡуйҙы. Шул саҡ Тәлғәт тә уянып киткәндәй булып, ялп итеп ҡатынына һораулы ҡарашын күсереп алды. Уныһы:

-Баш ауырта, тием бит, анау бер бала тауышынан, - тип ҡуйҙы.

Ире ҡатынының хәлен әллә төшөнмәй, әллә төшөнөргә теләмәй, оторо һөйләне лә ҡуйҙы:

-Бармаҡ башындай баланың шаярыуына ла башың ауырыһа инде. Ана, Гөлназ шуларҙың өсәүһе менән көнө буйы, бер ере лә ауыртмай.

-Кеше ҡатынының ҡайһы ере ауырта-ауыртмай икәнде һин ҡайҙан беләң? - Быларҙы яуапһыҙ ҡалмау өсөн генә әйтте Асия. Ире өндәшмәне. Ғәҙәтенсә. Күп ваҡыттағыса, ҡатынының тызыуын яуапһыҙ ҡалдырҙы. Быға ҡатыны ла ҡәнәғәт. Эстән генә ошондай ваҡыттарҙа "телләшмәһә ярар ине" тип уйлай һәм ире уны ишетеп торған кеүек, ваҡланмай, ҡатын-ҡыҙ хаслығына төшмәй. Ишетмәмешкә һалыша йә үҙ эше менән булышып ала ла китә. "Әлдә шулай, рәхмәт инде уға", тип уйлай ҡатын. Юғиһә, мин дә ярһыһам, ул да ҡыҙһа, ғауға сығыуға ла күп ҡалмаҫ.

Юл ыңғайы ире магазинға һуғылмаҡсы булып туҡтаны. Тик ҡатынының һаман ҡара көйөп ултырғанына бер генә ризаһыҙ күҙ һирпкәс, магазинға үҙе инеп китте. Иртән, ял көнө, дуҫтары менән ҡуна ятып балыҡҡа барырға һөйләшкәйнеләр бит, аҙыҡ-түлек йыйнайһы бар. Шуны ҡайғырта инде ире. Асияның иһә балыҡ ҡайғыһы китте. Күңелендәге уңалмай торған яраһы ҡанһырап асылды, һулҡып-һулҡып һыҙланы, бар булмышын һурып һыҡратты, йәнен әсетте. Мәңге уңалмаҫ яраһы...

Балаһыҙ улар. Йәшәүҙәренә лә ун дүрт йылдан ашты инде. Тик "булмаһа булмай ҙа ҡуя икән баҙарҙа сөсикмәк" тигән шикелле, булмаһа булмай ҙа ҡуя икән бала ла. Әлбиттә, уҡыған, белемле, хәлле кешеләр булараҡ, ҡиммәтле клиникаларҙа ла тикшереү үттеләр, дауаларҙың кәрәге булғандайын да, булмағандайын да ҡабул иттеләр. Ҡатыны имселәрҙе лә, һылап-һыйпаусыларҙы ла ҡалдырманы. Әйтеүҙәренсә, икеһе лә һау-сәләмәт, ана-бына балалары булыр, өмөттө генә өҙөргә ярамай. Тик ул өмөттө һаман да йәшәтеү өсөн көсөн генә ҡайҙан алырға? Асия үҙе күнер ине лә, ирен нисек итеп һаман да буш өмөт менән алдатмаҡ кәрәк? Ана бит бая, таныштарында, бәләкәй бала күреүҙән уйынсыҡ тапҡан көсөк хәленә төштө. Тантый-тантый саҡ тәпәйләп йөрөгән сабый янында дүрт аяғынан торманы ла тигәндәй, йә ятып, йә имгәкләп йөрөп уйнатты. Хатта сәй артына ла ултырманы бит, һыуынып бөткән сынаяғын ҡабалан ғына һемереп китте. Ә өйҙә бит ул ғүмерҙә лә һалҡын сәй эсмәй, аш-һыуҙың ҡайнар булғанын ярата. Әле иһә уныһын аңғарманы ла. Сөнки ана шул тәнәйҙән ары бер нәмә лә күрмәҫ хәлгә етте. Ҡайҙан индерҙе шунда. Йомошон унһыҙ ҙа йомошлар ине инде. Машина булғанда, тигән булып, әйтерһең, үҙенең машинаһы юҡ. Бар бит. Машинаһы ла бар, хан һарайындай йорто ла, ҡала үҙәгендә фатиры ла, яҡшы эш хаҡы алып ҡайтып торған ире лә... Тик бына бала... балаһы ғына юҡ. Һәм шул бер генә, бәләкәй генә "юҡ" бөгөн анауындай "бар"ҙың баһаһын төшөрә, хатта ваҡыты-ваҡыты менән бөтөнләй юҡҡа сығара...

Тәлғәт ике оло пакет күтәреп сыҡты ла, багажникка ҡуйғас, тышта яйлап тороп тартып алды. Уның да күңеле тыныс түгел, тимәк, уға ла ҡыйын. Бушҡа тәмәкегә тотона һалып бармай ул.

* * *

Асия өнһөҙ-тынһыҙ йөрөп тамаҡ йүнәтте, иртәгәгә ризыҡ төйнәне. Бешергәндәрен өҫтәленә теҙҙе лә ҡумта, бырау кеүек ҡышҡы балыҡ тотоу кәрәк-яраҡтары менән булышҡан иренә өндәште:

- Әйҙә.

Иркен аш бүлмәһендәге оҙон өҫтәлдең ике яҡ башына ашарға ултырҙылар. Ире ихлас туйынырға кереште. "Ысынлап асыҡҡанмы, әллә йөҙөмә ҡалҡынып ҡарарға телмәгәндән шулай ҡыланамы? Уф! Нимә яһиллана? Һуң асыҡҡандыр, эштән ҡайтып торалар бит". Үҙе лә ашарға маташып ҡараны. Бармай. Тәғәм дә үтмәй әле тамағына. Сығырға юл эҙләгән ярһыуы алҡымынан ала. Әллә үкһеп, әллә үкереп ебәргеһе килә. Ә ҡаршыһында ире һаман шап та шоп!

-Һин асмы ни?!

Ир сәйнәүенән туҡтаны ла, башын күтәрмәй генә, ярайһы уҡ турайған ҡалын ҡара ҡаштары аҫтынан ҡараны:

-Юҡ.

-Улайғас, - Асия алтын ялатылған ҡалаҡ-сәнскеләрен шалтыратып, тәрилкәһенең бер был, бер теге яғына күсерҙе.

- Ашарға саҡырҙың бит.

-Саҡырҙым шул... Аша, - ҡатындың тауышы шымып, йомшарып уҡ китте. Унан усын эйәгенә терәп, бер килке ирен күҙәтеп ултырҙы ла, төптән һыҡрап сыҡҡан ғазаплы ла, бер үк ваҡытта йәлләгән дә тауыш менән:

-Тәлғәт... һиңә балаһыҙ ҡыйынмы? - тип һораны. Һораны һәм ире, быға тиклем тиҫтәләрсә, йөҙҙәрсә тапҡыр булған кеүек, килер ҙә сәсенән, арҡаһынан һөйөп тынысландырыр, күңел күген ҡаплап алған ҡара болот кеүек уй-хәсрәттәрен туҙғытып ебәрер тип көттө. Көттө. Иренең тойғоларын меңенсе ҡат үҙ-үҙенә дәлилләргә теләне.

- Ҡыйын.

Әкрен генә әйтте быны ире. Тик өҙөп, ышаныслы итеп. Ҡаршы өндәшә, һүҙ ҡуйырта алмаҫлыҡ итеп. Был яуаптан һуң күҙ йәштәре лә, үпкә лә, хатта йөрәгең ярылып тәгәрәп китеп йән биреү ҙә урынһыҙ кеүек булып ҡалды. Шунлыҡтан, иренең ашап бөтмәгән тәрилкәһен ситкә шылдырып, баш ҡағып ҡына рәхмәт белдереп, залға үтеп китеүен ҡараштары менән генә оҙатып ултырып ҡалды ҡатын...

Ә бит белә ине ул бер килеп ошондай яуап булырын. Әлеге лә баяғы, үлә алмай тартҡылашҡан өмөттөң һуңғы ҡылдарын тыңҡылдатып өҙә алғандай ниндәйҙер бер һүҙ барлығын... Һәм ул әйтелде...

Ҡыйын... Тимәк, уға был йортта, был донъяла балаһыҙ ҡыйын. Тимәк, Асияның һөйөүе генә уның күңел бушлығын тултыра алмай... Тимәк, нисек кенә һыр бирергә теләмәй тырышып көн итеп ятҡанда ла, шатланғанда-ҡыуанғанда ла, иркә-наҙҙа, яҡшы тәрбиәлә булғанда ла уға барыбер ҡыйын... Ҡыйын...

...Яҡтырыр-яҡтырмаҫтан тороп кейенгән Тәлғәт, сәй ҡуйҙы ла, яландай киң карауаттың ситендә генә йомарланып ятҡан ҡатынының яурынына ҡағылды:

- Тораһыңмы?

Асия иренең мыштым ғына йөрөп ятыуын күптән һиҙеп-тойоп ятһа ла, яуап бирмәне - йәнәһе, йоҡлай. Тегеһе лә быны белә. Тағы ла ипләп кенә өндәшә:

- Ярар, һин бармаҫ булһаң, мин сығам. - Ишек төбөндә тауышын күтәрә төштө, - ярай, пока! Шылтыратырмын!

Ҡатын тауыш-тынһыҙ ятып ҡалды.

* * *

Быяла аръяғында ялп-йолп үҙгәргән панораманы күҙәтеп барһа ла, уйҙары бөтөнләй ситтә, әллә нисә йылдар арауығында оса Асияның. Иртәнсәк ире сығып киткәс, күпме генә тырышып ҡараһа ла, күҙен йома алманы. Ысынында, төндә лә йүнле йоҡо булманы инде, әүен баҙарына юллаҡыу өсөн белгән бар ысулдарын ҡулланып ҡараны: эстән һынап та, уйланмаҫҡа тырышып та, хатта наушниктар аша көй тыңлап та булашты - файҙаһыҙ, һуңғы ҡарағанында сәғәт дүртенсе яртыны күрһәтә ине. Аҙаҡ инде йонсоп, талсығып, нисек йоҡлап киткәндер - иҫләмәй.

Хәҙер инде ял көнөнөң пландары ҡырҡа үҙгәргәс, тороп, нимә менән булашырға икән, тип, фекер төйнәргә итте лә, инде нимәгә генә тотонһа ла, нимә генә башҡарһа ла мәғәнәһен тапманы. Шулай уҡ та тормошо сараһыҙлыҡҡа килеп терәлдеме ни?.. Ҡатын үҙе төйнәп ташлаған төйөндө сисергә маташып сәбәләнгән һайын уны нығыраҡ сырматты, буталды. Шулай күҙҙәрен түбә биҙәктәрендә йөрөтөп ята торғас, башына кинәт бер уй килде: туҡта, апайына барып ҡайтһын әле, тота килеп әллә нимә менән ярҙам итә алмаһа ла, яйлыраҡ кәңәш бирер, һис юғы, күңелен бушатыр. Эсендәге йәнен һурып алып барғандай зарын һүҙ менән һөйләһә, бәлки, бошоноуы кәмей төшөр. Апайы ла аҡыллы кеше, нимә типтер әйтер, әйтмәһә лә, тыңлар, үҙ ҡанының хәсрәтен ауырына баҫыр. Һәр ваҡыттағыса инде.

* * *

...Айһылыу апайынан өс йәшкә генә кесе булһа ла, уны, нишләптер, үҫкәндә ҙур итеп ҡабул итте. Уйлап ҡараһаң, әле лә шулай инде. Бәләкәй саҡта апайы уны баштан-аяҡ үҙе көттө, тәрбиәләне, тиһәң дә артыҡ булмаҫ ине. Әсәһе ике йыл һайын яңы бәпәй алып, шулар мәшәҡәтенән бушай алманы. Инде үҫмерлек ҡорона инеп барғанда Асия әсәһенең был ҡылығын моңһоҙ рәүештә хәйерселек үрсетеү итеп баһалай ине һәм йыш ҡына мәктәптән ҡайтып инеп, кисә генә йыйыштырғандарын баштүбән әйләндергән ҡусты-һеңлеләрен әрләгәндә, әсәһенә лә өлөш сығарҙы:

- Бер нәмәгә файҙаһыҙ нәмәләр! Өй болартыуҙан башҡаға эшкинмәйҙәр! Нимә тип алдың ошоларҙы! Берәүҙә лә бы һәтте бала юҡ! Нимәгә кәрәк улар?!

Әсәһе, йыуашлығынанмы, әллә ысынлап моңһоҙлоғона барыпмы, ҡыҙының ярһып сәрелдәүенә иғтибар итмәй. Баҙар шикелле булып таралып ятҡан донъяһында һаман да тәнәйҙәре менән мыжғыша.

Бәләкәйерәк сағында нисек йөрөгәндер, әммә мәктәптең әле башланғыс синыфтарында уҡ өҫ-башына етешмәгәнлекте, кейеменең башҡаларҙыҡына ҡарағанда ҡайтыш икәнлеген аңғарҙы Асия. Йыш ҡына яғаеңдәренең алмаштырылмағанына, алъяпҡысының бысраҡ булыуына шелтә яһанылар. Кемдәрҙер кейемдәр бирҙе, еңдәрен төрөп, ҡыҫҡартып, ҡырҡып-ямап әллә нимәләр әтмәләп кейҙерҙеләр. Был хәл ҙурая бара үтә лә кәмһетте ҡыҙҙы. Бигерәк тә һәр ерҙә "Күп балалы ғаилә, етешмәйҙәр, ауыр йәшәйҙәр", тип йәлләп ҡарауҙары ауыртҡан сөйәленә баҫып торған кеүек булды.

Ҙурая бара Асия Айһылыу апайынан кескәй туғандарына ҡатылығы менән айырылды. Дәфтәр-китаптарын туҙҙырған өсөн, күп һорап тормай, сыбыҡ менән сыжлатты, эшкә ҡушҡанда арҡырыланһалар ҙа тумпылдата һуҡҡылап алды. Әсәһенең йыйнаҡһыҙлығына үс иткән шикелле, үҙе үтә таҙалыҡ ятраҡан, тәртип тотоуға ынтылған бала булып сыҡты ул. Туғандарын һыпырып тотондо, әрләп-туҡмап екте, буйһонмағандары өсөн ҡулында ниндәйҙер бер язалау ҡоралы уйнап ҡына торҙо. Унан хатта әсәһе лә шөрләне, буғай.

Балаларҙан екһенеп, тамам биҙә булып үҫте ҡыҙ. Шулар артынан таҙалап, йыуып-йышып, бишек бәүетеп үтте балалыҡ, үҫмерлек осоро. Бәләкәс туғандарын һәм әсәһен ошо етешмәгәнлектең, әрпешлектең сәбәпсеһе итеп күрҙе. Башҡалар кеүек иркәләнеп, вайымһыҙ ғына йәшәй алыу мөмкинлегенән мәхрүм иткәндәре өсөн күралмаҫ хәлгә етеп киткән саҡтары ла булды туғандарын. Уйнағанда ла, әхирәттәре һымаҡ, "бәпәй" төрмәне, ҙурая бара киләсәккә хыялдар ҡорғанда ла ныҡлы итеп "Минең балам булмаясаҡ, мин яңғыҙым йәшәйем" тиер булды. Сабый күрһә, һөймәй түҙә алмаған әхирәттәренә аптыраны: нисек итеп шул ыҙаларҙы яратмаҡ кәрәк?

Юғары синыфтарҙы баш ҡаланың интернат-мәктәбендә уҡып бөттө. Бында ла башлыса уның кеүек күп балалы ғаилә балалары, етемдәр тупланғайны. Юғары уҡыу йортона уҡырға ингәндә лә ана шул "күп балалы" ғаилә ағзаһы булыуы алдырҙы - конкурсһыҙ-ниһеҙ ҡабул ителде.

**(Дауамы бар).**



ЗАУЫҠ

# ЭЙ, БАШҠОРТОМ, КЕЙ ТҮБӘТӘЙ!

## Эй, башҡортом, әйт аҙан!

*Зөлфиә ХАННАНОВА*



### Аллаһу - Раббүл ғәләмин*

Күктә серле тамғалар бар,
Күктә - сихри буяуҙар,
Күрә уны бары ла тик
Ҡәлептәре уяуҙар.
Күктәр - затлы,
Ҡатлы-ҡатлы!
Ҡабатлайым шуға мин:
Собханаллаһ!
Собханаллаһ!
Аллаһу - Раббүл ғәләмин.

Күктә матур яҙыуҙар бар,
Күктә -  көслө доғалар.
Тик һиҙгерҙәр уҡый уны,
Ғәмһеҙҙәргә - юҡ улар!
Күктә -  серҙәр!
Изге һүҙҙәр
Ҡабатлайым шуға мин:
Әлхәмдүлилләһ!
Әлхәмдүлилләһ!
Аллаһу - Раббүл ғәләмин.

Күктә оло ғилемдәр бар:
Аҡыл етмәҫ сикһеҙ аң!
Күктән  яуа бәрәкәттәр
Аң булһаң, уяу булһаң!
Күктә - бәхет,
Көрси-тәхет!
Ҡабатлайым шуға мин:
Аллаһу әкбәр!
Аллаһу әкбәр!
Аллаһу - Раббүл ғәләмин.

### Урам булып...

*(Баш ҡалабыҙ Өфөлә Салауат Юлаев урамы менән Зәйнулла Рәсүлев урамы барып тоташҡан урын бар)*

Һеҙ бергәләр  унда,
И остаздар
(Йәндәр күккә аша).
Урам булып
Килеп күрештегеҙ
Сал быуаттар аша.
Рухи батыр менән
Рухи батша -
Әйтерһең дә,
Ҡалҡан:
Аҙан булып
Илгә яңғыраған,
Ғәскәр булып
Ҡалҡҡан!

* * *

Минең халҡым аҡ биләүгә төрөп,
Ҡаршы ала тыуған бәпесте.
Күңелдәре яҡты булған өсөн
Ярата ул шулай аҡ төҫтө!

Минең халҡым йола, әҙәп һаҡлап,
Аҡ мендәргә килен төшөрә,
Сәфәр сығыр булһа аҡ юл теләй,
Ап-аҡ һөттән ризыҡ бешерә.

Минең илем -  әүлиәләр иле!
Фатихалы был ер шуғалыр:
"Аллаһ!" - тиеп улар зекер әйткән,
"Халҡым!" - тиеп ҡылған доғалар!

Әүлиәләр - Хоҙай бәндәләре:
Һинең атай, минең олатай.
Сабыйҙарға ҡара: нисек улар
Доғаларҙы ихлас ҡабатлай!

Әүлиәлек  беҙҙең ҡанда бит ул!
Аҡ намаҙлыҡ халҡым түшәһен!
Аҡһаҡалы булып ошо ерҙең,
Ағинәйе булып йәшәһен!

### Эй, башҡортом!

Эй, башҡортом, кей түбәтәй!
Эй, башҡортом, әйт аҙан!
Ата-бабалар йолаһын
Тергеҙәйек ҡайтанан!

Эй, башҡортом, йәй намаҙлыҡ!
Теләк телә сәждәлә,
Ил-йортобоҙ тыныс булыр,
Урап үтер мең бәлә.

*Раббул ғәләмин (ғәр.) - Ғәләмдәр хужаһы

Эй, башҡортом, тарт тиҫбеңде,
Әйт һин: "Аллаһу әкбәр!"
Киң күңеле менән Хоҙай
Бар халҡымды бүләкләр!

Эй, башҡортом,  тот ураҙа,
Эй, башҡортом, сал ҡорбан.
Йөрәгеңдә иман артһын,
Күңелеңдә - миһырбан.

Эй, башҡортом, ҡалдыр "Ил!" тип,
Доға ҡылырлыҡ бала,
Ошо изге еребеҙгә
Хужа булырлыҡ бала!
Лә иләәһә илләллаһ!
Лә иләәһә илләллаһ!

* * *

Ил өҫтөндә иң яманы:
Эскән бисә,
Ирҙән-иргә, ҡулдан-ҡулға
Күскән бисә.
Ил өҫтөндә иң яманы:
Эскән ирҙәр,
Ҡатын-ҡыҙҙың фиғеленә
Күскән ирҙәр.
Ил өҫтөндә иң яманы:
Эскән бала,
Беләгенә ағыу ҡаҙап
Үҫкән бала.
Эсһә бисә, эсһә ирҙәр,
Эсһә бала,
Был донъяла ҡыуанырлыҡ
Ниҙәр ҡала?!

### Әүлиәләр әйткәне

Ишелһә лә тауҙар
Бер-бер артлы,
Ҡире аҡһалар ҙа
Йылғалар,
Эй, Торатау!
Ҡағылмаҫтар һиңә:
Һаҡлап торор
Беҙҙең доғалар...
Хоҙай ҡушмаҫ
Һине тәләфләргә,
Ә шулай ҙа
Уяу булығыҙ!
Дөрөҫ микән
Йәшәү рәүешегеҙ,
Иманлымы
Ҡыуған юлығыҙ?
Кешеләр бит хәҙер
Ни эшләптер
Уйһыҙ-ғәмһеҙ
Ҡурсаҡ һымаҡтар...
Торатауҙы
Эйе, беҙ һаҡларбыҙ,
Үҙегеҙҙе бына
Кем һаҡлар?..

### Алғыш

*(Былтырғы Рамаҙан айында донъяға килгән сабыйҙар: Йәғәфәр, Сәлимәкәй һ.б. ихлас сәләмләп)*

Лә иләәһә илләллаһ!
Унған булһын был бала!
Был донъяны йөмләр өсөн
Тыуған булһын был бала!

Лә иләәһә илләллаһ!
Батыр булһын был бала,
Барса кеше һоҡланырлыҡ
Матур булһын был бала!

Лә иләәһә илләллаһ!
Ипле булһын был бала,
Ил тип фекер йөрөткәндә
Төплө булһын был бала!

Лә иләәһә илләллаһ!
Зирәк булһын был бала,
Ил-йортона, үҙ халҡына
Терәк булһын был бала!

Лә иләәһә илләллаһ!
Ғорур булһын был бала,
Илде яҡлап ҡалҡан һымаҡ,
Торор булһын был бала!

Лә иләәһә илләллаһ!
Оло булһын был бала,
Аллаһуның иң һөйөклө
Ҡоло булһын был бала!
Собханаллаһ! Машаллаһ!

### Йәннәтле бул, милләтем!

- Йә, Мөхәммәт (с.ғ.с.),
Әйтсе, зинһар,
ниҙә һинең зиннәтең?
-Таныуымда, табыуымда
Хаҡ Тәғәлә күҙрәтен!
- Йә, Мөхәммәт (с.ғ.с.),
Әйтсе, зинһар,
ҡайҙан һинең көс-дәртең?
-Таныуымдан, табыуымдан
Хаҡ Тәғәлә йәннәтен!
- Йә, Мөхәммәт (с.ғ.с.),
Табырмы һуң йәннәтеңде милләтем?
-Мин өҙөлөп саҡырырмын:
"Өммәтем!
Өммәтем!
Өммәтем!"

* * *

Их, яулыҡһыҙ йөрөйбөҙ шул, ҡыҙҙар,
Бар ирҙәрен илдең аҙҙырып,
Бар ирҙәрен илдең меҫкен итеп,
Һуңғы иманынан яҙҙырып.

Ә бит ниндәй ирҙәр булған элек
(Мин ишетеп беләм йырҙарҙан)!
Ил терәге улдар тыуыр микән
Ярым-шәрә ҡатын-ҡыҙҙарҙан?..

Илдә мәшхәр хәҙер, шул мәшхәрҙең
Булыр микән берәй туҡтары?
Яулыҡ ябынмаған ҡатындарҙың
Ҡарашында - иблес уҡтары.

Яулыҡ ябынмаған ҡыҙ-ҡырҡынды
Аяр микән ирҙең аҙғыны?..
Шулмы инде илдең күрәсәге,
Шулмы хәҙер беҙгә яҙғаны?..

Яулыҡ ябынмаған ҡатын-ҡыҙҙар -
Мәсекәйме ул беҙ, убырмы...
Яулыҡ ябынмаған инәйҙәрҙең
Доғалары ҡабул булырмы?

Ә бит бар ғәмебеҙ һыйған уға,
Ябай әйбер түгел ул яулыҡ,
Уның көсө, уның хәсиәте
Йәһәннәмдән ҡалҡан булырлыҡ!

Аҡ яулыҡлы инәй доға ҡылһа,
Фәрештәләр баҫыр күс һырып...
Ҡуй, яулыҡһыҙ йөрөмәйек, ҡыҙҙар,
Илдең бәрәкәтен осороп!..

### Сабыр ит, бәндә!

Йәнең бар икән
Әлегә тәндә,
Намаҙҙар уҡы
Иртәнге мәлдә.
Уянам тиһәң
Иманлы хәлдә,
Сабыр ит, бәндә!
Сабыр ит, бәндә!

Ҡояш көлгәндә
Һинең түбәңдә,
Кәмселек тимә,
Булһаң түбәндә.
Дауам ит көндә
Иманлы хәлдә,
Сабыр ит, бәндә!
Сабыр ит, бәндә!

Төндәй ҡараңғы
Гүргә кергәндә,
Булырға тырыш
Иманлы хәлдә.
Раббың уятыр
Үлдем, тигәндә.
Сабыр ит, бәндә!
Сабыр ит, бәндә!

### Аманат

*Милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың 260 йыллығы айҡанлы*

Һиҙмәнегеҙ. Барығыҙҙың иртән
Ҡағып сыҡтым күңел ишектәрен,
Юлай улы Салауат рухына, тип,
Доға ҡылғандарҙы ишетмәнем.

Юғалттығыҙ микән ҡиблағыҙҙы,
Бүтән микән хәҙер асманығыҙ?
Барығыҙҙың күңеле бикле ине,
Берегеҙ ҙә ишек асманығыҙ!

Тәҙрәләргә килдем. Таң атыуға
Асырһығыҙ, тиеп, ҡорғандарҙы,
Тик күрмәнем, салауаттар әйтеп,
Намаҙлыҡта уяу торғандарҙы.

Ғәфләт мендәренә башын терәп,
Өҫтәренә ҡаплап ҡалын юрған,
Иҙерәп китеп йоҡлай ине халҡым,
Ғәзиз халҡым - рухы һындырылған!

...Мәңгелектең һалҡын ҡосағына
Кире борам тиһәм юрғаларым,
Салауаттың рухы шат булһын, тип,
Бер изге зат ҡылды доғаларын...

Ҡабул булһын доға:
Хужа итеп Хоҙай илгә
бирһен һөйөклөһөн!
Танырһығыҙ уны,
Аманатҡа
Ҡалдырып китәм
рухым бөйөклөгөн...

### Иҫән-һау йөрө!

Ҡайҙа ғына йөрөһәң дә
Иҫән-һау йөрө!
Кемдеңдер бит Ер йөҙөндә
Һин берҙән-бере.
Кемдеңдер ғәзиз атаһы,
Кемдеңдер улы,
Һине көткән ҡатындың да
Уң булһын юлы!
Доға ҡылам. Рухым һиңә
Түгел ете-ят,
Миңә түгел,
Миңә түгел,
Илгә кире ҡайт!
Үҙем өсөн һорамайым:
Иҫән-һау йөрө!
Илемдең бит, халҡымдың бит
Һин - берҙән-бере!

ИНТЕРНЕТТАН



# СТРЕСС...

## аппетитты үҙгәртә

■ Ғалимдар А витамины дефициты ваҡытында ҡабул ителә торған махсус банан уйлап тапҡан. Генетик үҙгәреш кисергән банан ғәҙәти банандан айырылмай кеүек, әммә ул эстән һарғылт һары төҫтә. АҠШта был продуктты кешеләрҙә ынап ҡараясаҡтар. Time яҙыуынса, белгестәр емештең А витамины ҡытлығын тулыландырыуға булышлыҡ итәме, юҡмы икәнлеген асыҡласаҡ. 6 аҙна дауамында барған һынауҙарҙың һөҙөмтәһе йыл аҙағында билдәле буласаҡ. Әгәр ҙә ГМО-банандар үҙҙәренең файҙаһын раҫлаһа, 2020 йылдан уларҙы Угандала үҫтерә башлаясаҡтар, артабан ул Руанда, Танзания, Кения кеүек Африка илдәренә тараласаҡ. А витамины дефициты һөҙөмтәһендә бөтөн донъяла йыл һайын 700 мең бала үлә, яҡынса 300 мең бала күреү һәләтен юғалта, тип иҫәпләй Австралия ғалимдары.

■ Бөтөн донъя яман шеште өйрәнеү фонды белгестәре раҫлауынса, көн һайын бер генә сосиска ашау ҙа эсәк яман шешенә килтереүе ихтимал. Үлем осрағы күрһәткестәр буйынса, эсәк яман шеше үпкә яман шешенән генә ҡалыша. Эшкәртелгән ит (бекон, ыҫланған ит, салями, тауыҡ боттары, сосискалар) ашау был хәүефте 20 процентҡа арттыра. Профессор Мартин Уайзмен был ризыҡтарҙы туҡланыу рационында аҙ ғына ҡалдырырға кәңәш итә. Ә Оксфорд университеты белгестәре итле ризыҡтарҙан бөтөнләй баш тартыу йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары хәүефен 32 процентҡа түбәнәйтә, тип раҫлай. Ғалимдар 11 йыл буйына Англия һәм Шотландияла йәшәүсе 44 мең ярым кешене тикшергән, уларҙың 15 меңдән ашыуы вегетариан булған. Ошо ваҡыт эсендә 169 ҡатнашыусы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән үлгән, тағы ла меңдән ашыуы ошо ауырыу менән табиптарға мөрәжәғәт иткән. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, улар барыһы ла ит, балыҡты йыш ашаған. "Беҙ бының менән итле ризыҡтар ҡулланыуҙан бөтөнләй тыйылырға ҡушмайбыҙ, бары тик туҡланыуҙың сәләмәтлек торошона йоғонтоһо барлығын ғына иҫегеҙгә төшөрәбеҙ". Шулай ҙа, табиптар фекеренсә, ит ашамау һөҙөмтәһендә артериаль ҡан баҫымы һәм ҡандағы холестерин кимәле төшә, шулай уҡ тән массаһы нормаға килә, ә был факторҙар йөрәк сәләмәтлеге менән бәйле.

■ Стресс тәм рецепторҙарына йоғонто яһай. Стресс ваҡытында күптәр хәүеф тойғоһон ризыҡ менән баҫа. Доктор Роквелл Паркер билдәләүенсә, был мәлдә кешеләр татлы ризыҡтарҙы күберәк ашай. Бында глюкокортикоидтар "гәйепле". Стресс кисергәндә телдә тап ошо гормон күбәйә, ул бигерәк тә телдең татлы тәмде таныған өлөшөндә ҙур күләмдә була.

■ Окинавалағы Рюко университеты тикшеренеүселәре асыҡлауынса, ҡәһүә ҡан әйләнешен яҡшырта. Йөрәк сәләмәтлеге өлкәһе эксперты профессор Масато Цуцуи билдәләүенсә, ҡәһүә йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфаланыусы ҡайһы бер пациенттарға ярҙам итә ала. Тикшеренеүҙәрҙә ҡәһүәне бөтөнләй тиерлек ҡулланмаған 22-30 йәштәге кешеләр ҡатнашҡан. Уларҙың бер өлөшө ғәҙәти ҡәһүә, икенсе өлөшө кофеинһыҙ ҡәһүә эскән. Һөҙөмтәлә, ябай ҡәһүәнең артериаль баҫымды бер аҙ күтәреп, ҡан тамырҙары стеналары күҙәнәктәре эшмәкәрлеген арттырыуы билдәле булған.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Изге Рамаҙан айына аяҡ баҫабыҙ. Аллаһы Тәғәлә был изге Ҡөрьән Кәрим ебәрелгән айҙа үҙ ҡолдарына ҙур шәфҡәтлелек күрһәтә. Рамаҙан айында Йәннәт ҡапҡалары асыла, Йәһәннәм ҡапҡалары ябыла, мосолмандарҙы тура юлдан тайпылдыртмаһын өсөн шайтандар сылбырҙар менән бәйләнә. Хәҙистәрҙә: "Кешеләр Рамаҙан айының өҫтөнлөктәрен белһә, улар уның мәңге һуҙылыуын теләр ине", - тип әйтелә.**

# ИЗГЕ РАМАҘАН - ШӨКӨР АЙЫ



Аллаһы Тәғәлә Ер шарын төрлө төмләткестәр менән тулы өҫтәл кеүек яратҡан һәм кеше көтмәгән ерҙән уға ризыҡ бирә. Шуның менән Ул үҙенең хакимлығының камиллығын, Үҙенең сикһеҙ мәрхәмәтен, рәхимен, йомартлығын күрһәтә. Ә инде Изге Рамаҙанда кешеләр теүәл һәм ҡаты ҡағиҙәләр хөкөм һөргән бер ғәскәргә әйләнә. Бөйөк Солтан тарафынан табынға саҡырылған был ғәскәр, ҡояш батыуға яҡынлашҡас, итәғәтле ҡолдар кеүек "Рәхим итегеҙ" тигән әмергә көтә. Был ғәскәр Раббыбыҙҙың рәхимле, бөйөк, барыһына ла тигеҙ бүленгән йомартлығына үҙенең бурҙәм, тәртипле хеҙмәте менән түләй.

Аллаһы Тәғәлә Ерҙә кешеләр өсөн төрлө муллыҡ менән тултырған һәм бының өсөн тейешле хаҡ - Уға шөкөр итеү, рәхмәтле булыу иҫәпләнә. Аллаһы Тәғәләгә шөкөрлө булыу - ул бөтә ризыҡтың, байлыҡтарҙың, муллыҡтың Аллаһы Тәғәләнән килеүен, ошо бүләктәрҙең ысын ҡиммәтен төшөнөү, кешенең был ниғмәттәрһеҙ йәшәй алмаясағын аңлау. Изге Рамаҙан айындағы ураҙа - шөкөрҙөң, рәхмәт белдереүҙең хаҡ, таҙа, бөйөк асылын асыу сараһы ул. Сөнки күп кешеләр рамаҙан айынан башҡа айҙарҙа мохтажлыҡ, асығыу тойғоһон кисермәй, шуға күрә илаһи бүләктең ысын ҡиммәтен дә белмәй. Ҡатҡан икмәк киҫәге туҡ, бигерәк тә бай кеше өсөн бер ниндәй әһәмиәтҡә лә эйә түгел. Әммә ошо киҫәктең ни ҡәҙәр бөйөк ҡиммәт булыуын мөьмин ифтар ваҡытында аңлай. Изге Рамаҙанда батшанан алып фәҡиренә тиклем бөтәһе лә ошо ниғмәттәрҙең ысын хаҡын, мәғәнәһен төшөнә башлай, Раббыларының йомартлығына рәхмәттәрен белдерә. "Был минең мөлкәтем түгел, минең ризыҡ ашарға ла иркем юҡ, тимәк, был башҡа берәүҙең мөлкәте. Мин уның рәхсәтен көтәм", - ти һәм шулай итеп Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итә. Ураҙа шөкөр итеү сараһына әйләнеп, кешенең йәшәйештәге ысын ролен, урынын асыҡлай.

Кешенең йәмғәт тормошо күҙлегенән дә ураҙа ҙур мәғәнәгә эйә. Уларҙың береһе шул: кешеләр матди хәлдәренә торошло төрлө социаль баҫҡысҡа ҡарай. Ләкин ураҙаны бөтә талаптарына еткереп тотҡан хәллеләр ярлыларға мәрхәмәтлек тойғоһо менән ҡарай башлай, сөнки үҙҙәре лә күпмелер ваҡытҡа асығыу тойғоһо кисерә. Ураҙа булмаһа, үҙ мәнфәғәттәрен генә үтәү менән мәшғүл байҙар, асыҡҡан фәҡирҙең өлөшө ни ҡәҙәре әсе икәнен, ни ҡәҙәре улар йәлләүгә һәм ярҙамға мохтаж булыуын белмәҫ ине. Бәлки, икенсе берәүгә мәрхәмәтлек - хаҡ шөкөр тойғоһонон нигеҙе ул. Ниндәй генә кеше булмаһын, ул һәр саҡ үҙенән ярлыраҡты табасаҡ. Уға шәфҡәт, ярҙам күрһәтеү хәлле кешенең бурысына әйләнергә тейеш. Ураҙа ваҡытындағы фарыз, йәғни мотлаҡ асығыу булмаһа, мәрхәмәтлек, шәфҡәт булмаҫ ине. Бының эҙемтәһе булараҡ, теләктәшлек, ярҙам да булмаҫ ине. Бай кеше фәҡир кешенең хәлен үҙ тәнендә татымағанға күрә, ярҙам булған осраҡта ла ул ихлас күңелдән атҡарылмаҫ ине.

Рамаҙан айындағы ураҙа шәһәҙәт кәлимәһе, намаҙ, зәкәт, хаж менән бергә исламдың төп шарты, тереге һанала. Уның мосолман өсөн мотлаҡлығы Ҡөрьән Кәримдең "Әй, Минең берлегемде һәм барлығымды таныған иманлы бәндәләр! Һеҙҙән алда булған өммәттәргә фарыз ителгән кеүек, һеҙгә лә ураҙа ғибәҙәте фарыз ителде, бәлки, һеҙ ҙә, дингә кәмселек килтереүҙән һаҡланып, тәҡүә кешеләрҙән булырһығыҙ" (Әл-Баҡара сүрәһе, 183-сө аят) аяты һәм башҡа аят-хәҙистәр менән дәлилләнә. Балиғ булғандарға, үҙҙәрен мосолман тип иҫәпләгәндәргә, аҡылға зәғиф булмағандарға был ғәмәл фарыз. Ныҡ ауырығанда, сәфәрҙә саҡта, ҡатын-ҡыҙҙар ауырлы булған, бала табып таҙарынған, сабыйҙы күкрәк һөтө менән ашатҡан осорҙарында, күрем ваҡытында ураҙа ваҡытлыса кисектерелә (сәфәр ваҡытында, ҡыйынлығы булмаһа, ураҙа тотоу хуплана). Ләкин мөмкинлек сығыу менән мөьминдәр фарыз ғәмәлде көнөн көнгә килтереп үтәп ҡуйырға бурыслы. Шулай уҡ ураҙа тотҡанда ниәт итеү төп шарт булып тора. Ураҙа ябығыр, организмды таҙартыр, йә башҡа оҡшаш маҡсаттарҙа тотолһа, уның мәңгелек тормош өсөн файҙаһы юҡ, асығыу был донъя өсөн генә. Кеше ураҙа ғәмәлен Аллаһы Тәғәләнең барлығын, берлеген танып, ислам диненең хаҡлығына инанып, фарыз булыуын аңлап үтәһә генә ҡабул була. Ниәт сәхәр ваҡытында, йәки көндөң тәүге яртыһында әйтелә. Хәнәфи мәҙһәбендә ниәтте ҡыҫҡырып, ишеттереп әйтеү мотлаҡ түгел, иң мөһиме, кеше йөрәк менән ниәт алырға тейеш.

Ураҙа ғәмәленең нескәлектәре күп. Уларҙы тулыраҡ белер өсөн дин әһелдәренә, дини китаптарға мөрәжәғәт итеү зарур. Белем генә кешене хаталаныуҙан һаҡлай, уға ураҙаһын һәм барлыҡ ғәмәлдәрен тейешенсә үтәргә ярҙам итә. Быйыл рамаҙан айы 27 июндә ҡояш байығас башлана. Беренсе тәрәүих намаҙы ошо кистә уҡыла. 28 июнь ураҙаның беренсе көнө.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләне.**

# УРАҘАҒА НИӘТ ҺӘМ ИФТАР ДОҒАЛАРЫ

### Сәхәр ашағандан һуң

**Ҡояш ҡалҡырҙан ике сәғәт алда, сәхәр ашын ашағандан һуң, фарыз ураҙаны тотоу өсөн ошондай ниәт ҡылына:**

*"Бисмилләһир-рахмәнир-рәхим. Нәүәйтү ән әсумә саумә шәһри рамаҙанә минәл-фәжри иләл-мәғ-риби халисәл-лил-ләһи тәғәлә. Аллаһу әкбәр".*

**Мәғәнәһе:** "Аллаһы Тәғәлә өсөн тип таң атҡандан башлап ҡояш байығанға тиклем ихласлыҡ менән ураҙа тоторға ниәтләнем. Аллаһ - Бөйөк".

### Ауыҙ асҡанда уҡый торған доға

*"Бисмилләһир-рахмәнир-рәхим. Аллаһүммә ләкә сумтү үә бикә әмәнтү үә ғәләйкә тәүәккәлтү үә ғәлә ризҡикә әфтартү үә лисауми ғәдим мин шәһри рамаҙанә нәүәйтү фәғ-фирли мә ҡаддәмтү үә мә әххартү".*

**Мәғәнәһе:** "Эй, Раббым! Һинең ризалығың өсөн генә тип ураҙа тоттом, һиңә генә иман килтерҙем. Эштәремде тик Үҙеңә генә тәүәккәлләйем, Һин биргән ризыҡ менән ауыҙ астым, иртән тағы ла ураҙаға инергә ниәт иттем. Эй, гонаһтарҙы ярлыҡаусы Аллаһ, үткәндә эшләгән гонаһтарымды ла, эшләү ихтималы булһа, киләсәктәгеләрен дә ғәфү ит!"

ӘЙҘӘГЕҘ...

# БИТАРАФ БУЛМАЙЫҠ!



**Бер ваҡыт сысҡан ферма хужаһының кимереүселәргә ҡаршы ҡапҡан ҡуйыуын күреп ҡала. Ул был турала тауыҡҡа, һарыҡҡа, һыйырға һөйләй. Улар: "Ҡапҡандың беҙгә бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ, ул һинең проблемаң", - тип, сысҡандың һүҙҙәренә иғтибар итмәй. Күпмелер ваҡыттан ҡапҡанға эләккән йылан эргәһенән үтеп барған хужабикәнең аяғын тешләй. Хужабикәне дауаларға тырышып, тауыҡтан һурпа әҙерләйҙәр. Сирлəнең хәлен белергә килеүселәрҙе һыйлар өсөн һарыҡты һуялар. Хужабикә йылан ағыуынан һауыға алмай, был донъянан китеп баргас, мәрхүмә менән хушлашырға килеүселәрҙе ашатыу өсөн һыйырҙы һуялар. Ошо хәлдә диуарҙағы ярыҡ аша күҙәткән сысҡан бер кемгә лә бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы булмаған нәмәләр хаҡында фәлсәфәгә бирелә...**

Битарафлыҡ - кеше өсөн иң ауыр һәм иң ҡурҡыныс сирҙәрҙең береһе, шуға ла, кешенең битарафлығы дошман ғәскәрҙәренә ҡарағанда ла емергесерәк көскә эйә, тип бушҡа ғына әйтмәйҙәр. Йөрәгендә әҙ генә булһа ла кешелеклек сифаттары, мәрхәмәтлек булған кеше үҙенән ситтә барған хәлдәрҙе инҡар итеп, үҙ донъяһына ғына бикләнеп йәшәй алмай.

Кеше үҙе өсөн генә йәшәмәй. Хатта мең тапҡыр дөрөҫ тормош алып барғанда ла, ул туңған йөрәкле булып, яҡындарына һәм барлыҡ донъяға битараф була икән, был кеше үҙен Аллаһы Тәғәләнең иң камил заты тип иҫәпләй алмай. Әгәр ҙә дөрөҫ тормош алып барыу ғына етерлек булһа, Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә яҡшылыҡ менән яманлыҡтың нимә икәнен асып һалғандан һәм барыһына ла бер тапҡыр һөйләгәндән һуң, сауҙагәрлек йә башҡа һөнәр менән генә шөғөлләнеп, тыныс тормошта, рәхәтлектә йәшәр ине. Ләкин ул хәҡиҡәт хаҡында бер тапҡыр ғына һөйләү менән тынысланып ҡалмай, ә башҡа кешеләргә ошо хәҡиҡәтте еткереү, аңлатыу өсөн бар көсөн һала, ҙур һынауҙар, ҡыйынлыҡтар аша үтә. Һуңғы һулышына тиклем, өммәтем, тип өҙгөләнә. Үлем алдынан янына Ябраил фәрештә килеп, күк ҡапҡалары асылыуы, фәрештәләрҙең уны (Аллаһ Рәсүлен) көтөүе хаҡында әйтһә лә, Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе өсөн түгел, өммәте өсөн нимә әҙерләнеүе хаҡында һорай.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең изге сөннәтен тормош рәүешенә әйләндергән сәхәбәләргә, киләсәк быуындарҙың диндар кешеләренә лә битарафлыҡ сире ят була. Шуға күрә лә, ислам тарала, дәғүәт донъяның бар мөйөштәренә тиклем үк барып етә.

Был донъянан киткәндә бер гонаһлы кеше: "Йә, Раббым, мин күп яуызлыҡ ҡылдым, гонаһтар эшләнем, ләкин ысын йөрәктән ошо насарлыҡтарҙы эшләмәгәндәрҙе яраттым", - ти. Һәм ул ярлыҡана, сөнки изгелеккә, яҡшылыҡҡа бары иманы булған йөрәк кенә ҡыуана, тартыла ала. Ләкин үҙең хаҡында ғына уйлау тыштан үтә динле күренгән кешеләрҙе лә һәләкәткә килтереүе мөмкин. Жабир исемле сәхәбә Бәйғәмбәрҙән хәҙис еткерә: "Аллаһы Тәғәлә бер ҡаланы ер йөҙөнән юйырға бойороҡ бирә. Уның әмерен үтәгән фәрештә бойороҡто тормошҡа ашырғас та, икенсе фәрештәләр: "Йә, Раббым, был ерҙә, ошо ҡалала, ҡыҫҡа ғына мәлгә булһа ла Һиңә итәғәтлектән сыҡмаған, гонаһ эшләмәгән ҡолоң бар", - тиҙәр. Шул мәл Аллаһы Тәғәлә әмерен янырта. "Ҡаланы юҡ итеүҙе унан (ошо кешенән) башлағыҙ, сөнки уның йөҙө, сикәләре, бит тиреһе бер тапҡыр ҙа ҡыҙарманы, ул бер тапҡыр ҙа минең хаҡыма оялманы", - ти. "Кешеләр яман берәй эште күреп тә, уны тәҙтергә тырышмай икән, Аллаһы Тәғәлә ебәргән бәлә бөтә халыҡты ла ҡаплаясаҡ, яза бөтәһенә лә буласаҡ", - ти Мөхәммәт бәйғәмбәр икенсе бер хәҙисендә.

Бөгөн бар яҡлап битарафлыҡ таралыуының шаһиты беҙ. Бәғзе атаәсәләр ун ике-ун өс йәшлек балаларын, инде ҙурайҙылар, тип, киске уйындарға, клубтарға "тормошто өйрәнергә" сығарып ебәрә. Бер нисә йылдан күҙ нурҙарын боҙоусыны әҙләп яфалана, йәш быуындың "үҙҙәре кеүек" булмауына зарлана.

Үҙҙәре, туғандары, яҡындары, таныштары, бөтөн кешелек упҡын ситенә барғанда ла битараф ҡалғандар ҙа етерлек. Битарафлыҡ арҡаһында кеше рухи донъяһынан ғына түгел, матди донъяһынан да ҡолаҡ ҡаға. Әле бер хоҡуҡтарын, иртәгә икенсе хоҡуҡтарын ҡыҫҡарталар. Ғәҙелһеҙлек, бер тапҡыр ирек татығандан һуң, үҙенең ҡоласын көндән-көн киңерәк йәйә. Ләкин кеше һаман битараф, ул: "Мин бер үҙем ни эшләй алам инде?" - тип, ҡыл да ҡыбырҙатмай ултырыуын дауам итә. Һәм, ысынлап та, бер мәл бер нәмә эшләп булмаған көрсөккә барып төртөлә: йә ғәмәл дәфтәрҙәре ябылып, уның өҫтөнә ер ташлайҙар, йә биомассаға әйләндерелеп, үлемен көтә...

Мәҡәлә аҙағында фашизмға ҡаршы көрәшкән Мартин Нимёллер исемле протестант дин әһеленең әйткәндәренә күҙ һалайыҡ та, уйланайыҡ: "Нацистар коммунистар артынан килгәс, мин бер ни әйтмәнем, сөнки мин коммунист түгел инем. Һуңынан улар социал-демократтар артынан килде, мин тын ҡалдым, социал-демократ түгел инем. Һуңынан профсоюз эшмәкәрҙәре артынан килделәр, шымдым, профсоюз ағзаһы түгел инем. Һуңынан йәһүдтәр артынан килделәр, тынлыҡ һаҡланым, йәһүди түгел инем. Һуңынан улар минең артымдан килде, ләкин быға ҡаршы сыға алырҙай бер кем дә юҡ ине инде..."

**Искәндәр АРЫҪЛАНОВ.**

УЯН, УЙЛА...

# ИНАНМАЙ КЕШЕЛӘР

Инанмай кешеләр. Үҙҙәрен инандыра алырҙай мөғжизә көтәләр. Күк ҡапҡалары асылып, унан Аллаһы Тәғәләнең барлығы хаҡында тауыш ишетелеренә өмөт итәләр. Аллаһ илсеһе Ергә килеп, үҙҙәрен иманға саҡырыуын көтәләр. Уның үҙен күргәс кенә инанырға вәғәҙә итәләр. Инанмай кешеләр. Үҙҙәренең булмыштарына баҡмайҙар. Үҙҙәренең ниндәй камил йән эйәһе итеп яралтылғандарын танымайҙар. Бар ошо камиллыҡ хаҡында уйланмайҙар. Бар ошо камиллыҡ юҡтан килеп сыҡҡан, тип уйлайҙар. Үҙҙәрен шулай аҡлайҙар. Үҙҙәрен шулай алдайҙар. Аңһыҙ тәбиғәтте Раббылары кимәленә күтәрәләр. Шул уҡ тәбиғәтте Аллаһ яратҡанын күрмәйҙәр.

Инанмай кешеләр. Бар ғаләмде Яралтыусы хаҡындағы уйҙарҙы ситкә ҡыуалар. Яралтыусы хаҡында һөйләүселәрҙе лә ситкә тибәрәләр. Башын ҡомға тығып, бар көүҙәһе күренеп торған дөйәғош кеүек, үлемдән ҡасып ҡотолорға маташалар. Уйҙарҙы, уйланыуҙарҙы ситкә ҡуйып, яуапҡа тарттырылыуҙы йыраҡлаштырып була, тип уйлайҙар. Аңламайҙар, аңларға теләмәйҙәр, аңлатырға тырышыусыларҙы яҡын ебәрмәйҙәр. Инанмай кешеләр. Алланы таныуҙы -кәмселек, Аллаға табыныуҙы көсһеҙлек күрәләр. Раббыбыҙ алдында бурыс үтәүҙе иҫкелек ҡалдығы һанайҙар. Үҙҙәренең Аллаһы Тәғәлә ҡолдары булыуҙарын ҡабул итмәйҙәр. Бер Аллаһтың хакимлығына ла ышанмайҙар. Ә үҙҙәре меңдәрсә сәбәптәр ҡолона әйләнәләр. Шәһүәттәре ҡолдарына әйләнәләр. Нәфсәләрен илаһ итәләр.

Һис инанмай кешеләр. Һәр нәмәгә дәлил эҙләйҙәр. Һәр нәмәнең сәбәбен таптыралар. Һәр нәмәнең аңлатмаһын соҡоналар. Бер мәл сәбәптәр бөткән тыҡрыҡҡа терәләләр. Ләкин сығыу юлы булмаған тыҡрыҡҡа терәлгәс тә, хәҡиҡәтте ҡабул итергә ашыҡмайҙар. Тағы ла яңылышалар, тағы ла йыраҡлашалар, тағы ла аҙашалар. Сөнки тәкәбберлектәрен еңә алмайҙар. Хаталанғандарын танырға теләмәйҙәр. Тағы ла тәрәнерәк һаҙлыҡҡа батып барғандарында ла, ҡояшҡа яҡынлайбыҙ, тип, үҙҙәрен тынысландыралар.

Инанмай кешеләр. Ғүмер үткәнен, ваҡыт үткәнен, көндәре һанаулы ҡалғанын аңлайҙар. Хатта тормош был донъя менән генә тамамланмаясағын да аңлайҙар. Әммә ғәфләткә биреләләр. Күңел бушлығына юлығалар. Сығыу юлдарын да эҙләйҙәр хатта. Ләкин белә тороп хәҡиҡәтте инҡар итәләр. Уйлар ерҙә мейе ептәрен ҡыбырлатмайҙар. Ялған ҡиммәттәрҙе хәҡиҡәт итеп ҡабул итәләр. Инанмай кешеләр. Ысынбарлыҡты, Хаҡ Раббыны инҡар итәләр. Ғүмерендә ялған һөйләмәгән 124 мең бәйғәмбәрҙең хәбәренә ҡолаҡ һалмайҙар, әүлиә-әсфиәләрҙең һүҙендә яҙыҡ күрәләр, изге китаптарҙың хәрефен шик аҫтына ҡуялар. Аллаһы Тәғәләгә ышанмайҙар. Үҙҙәрен унан өҫтөн күрәләр. Әммә бер көн уның алдында яуап тоталар. Фани донъяға Аллаға ышанып йәшәр өсөн ҡайтырға һорайҙар. Һуҙ бирәләр, ялбаралар, хәҙер инде уларҙың үҙҙәренә ышанмайҙар. Утҡа ташланалар.

Аллаһы Тәғәлә беҙҙе инанмау эҙемтәләренән һаҡлаһын.

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Инициативалылыҡ: унһыҙ аҙым да яһау мөмкин түгел

**Уйланырға мәжбүр итеүсе һорауҙар**

Ысынлап та һеҙ инициаторҙар иҫәбенә инәһегеҙме? Үҙегеҙ мөмкинлектәр эҙләйһегеҙме йәки унайлы мәлде көтәһегеҙме? Күңел төпкөлөндә ятҡан инстинкттар менән ҡоралланып, әүҙем аҙым яһарлыҡ ихтыяр көсөнә һәм теләгенә эйәһегеҙме? Әллә был донъяла булған нәмәләрҙе анализларға ғына беләһегеҙме? Chrusler фирмаһының элекке идара рәйесе Ли Якокка әйтеүенсә: "Хатта дөрөҫ ҡарар ҙа, әгәр һуңлап ҡабул ителә икән, дөрөҫ булмаҫҡа мөмкин". Тормошоғоҙҙоң тыныс ағышына һуңғы тапҡыр ҡасан йоғонтоло үҙгәреш индерҙегеҙ? Әгәр күптән инде үҙегеҙҙе нимәлер эшләргә мәжбүр итмәһәгеҙ һәм унайлы зонанан сыҡмаһағыҙ, тимәк, үҙегеҙҙә ҡабат инициативалылыҡ уятыуға мохтажһығыҙ.

**Өйгә эш**

**Инициативалылыҡты үҫтереү өсөн түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:**

- Психологик көйләнешегеҙҙе үҙгәртегеҙ. Әгәр инициативалылыҡ етешмәй икән, тәү сиратта, ошо проблеманың сығанағы ситтә түгел, ә үҙегеҙҙә икәнен аңлағыҙ. Анығыраҡ берәй нәмә эшләргә кәрәк булғанда ниндәй сәбәп менән икеләнәһегеҙ? Һеҙҙе хәүеф ҡурҡытамы? Үткән уңышһыҙлыҡтарығыҙ аяҡтарығыҙҙы тышап торамы? Әллә ошо мөмкинлек вәғәҙә иткән файҙаны күрмәйһегеҙме? Икеләнеүҙәрегеҙҙең сығанағын табығыҙ һәм уларҙы бөтөрөү өҫтөндә эшләгеҙ. Үҙегеҙҙең асылығыҙҙа алға китә алмайынса, ысынбарлыҡта алға бара алмаясаҡһығыҙ.
- Көрәкле мөмкинлек ҡасан килеп ишек шаҡыр икән, тип көтмәгеҙ. Мөмкинлек үҙе килеп ишек шаҡымай. Унайлы урынығыҙҙан сығып, уларҙы үҙегеҙ эҙләргә тейешһегеҙ. Активтарығыҙҙы, һәләтегеҙҙе һәм ресурстарығыҙҙы ҡайтанан ҡарағыҙ. Үҙегеҙҙең ҡеүәтегеҙҙе күҙалларлыҡ берәй нәмә эшләгеҙ. Аҙна һуҙымында кисекмәҫтән көн һайын ниндәйҙер мөмкинлек эҙләй башлағыҙ. Ҡайҙа анығыраҡ ихтыяж күрәһегеҙ? Кем һеҙҙең тәжрибәгеҙгә, белемегеҙгә мохтаж? Һеҙ булмаған ниндәй төркөм тәҡдимегеҙҙе һулар һаяу кеүек көтә? Мөмкинлектәр бөтөн ерҙә лә бар.
- Артабанғы аҙымды яһағыҙ. Мөмкинлектәрҙе күреү - бер, ошо йүнәлештә ниндәйҙер анығыраҡ нәмә эшләү - бөтөнләй икенсе. Ҡасандыр берәү, душ аҫтында торғанда һәр кемдең ҙур идеяһы бар, тигән. Әммә бик һирәктәр генә душтан сығып, һөртөнгәс, ошо йүнәлешкә тәүге аҙым яһай. Мөмкинлектәрҙең иң яҡшыһын һайлап алығыҙ ҙа, уны ахырынаса еткерергә тырышығыҙ. Ошо мөмкинлекте тормошҡа ашырғанға тиклем туҡтамағыҙ.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ӨФӨ МӘСЕТТӘРЕ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**25-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Шайморатов. Метрополитен. Йәшник. Ҡалас. Нәсел. Монтана. Бетеү. Көнбағыш. Рәйсә. Бутерброд. Төйәк. Үтәголов. Оро. Омск. Сик. Калахари. Кавалерия. Мейес. Маргарин. Шәүлә. Тояҡ. Хикәйә. Кусимов. Алатыр. Хәсиҙә. Адвокат. Торт. Астроном. Анион. Салбар. Ангара. Тулҡын. Әүен. **Вертикаль буйынса:** Орск. Матросов. Үркәс. Кәлимә. Табло. Тәкә. Мэтр. Майя. Нардек. Ярсыҡ. Интендант. Айран. Ватан. Килбәт. Оҫол. Саян. Ҡорт. Казарма. Ләлә. Тәтелдәүек. Аҙан. Сиркәү. Кейем. Мурзин. Тыуа. "Аврора". Лүтер. Бағана. Гәрәев. Харҙа. Лава. Ваҡиға. Нәфрәт.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Июнь - Июль (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 30 (3) дүшәмбе | 3:45 | 4:15 | 5:45 | 14:30 | 21:24 | 22:54 | 0:24 |
| 1 (4) шишәмбе | 3:45 | 4:15 | 5:45 | 14:30 | 21:24 | 22:54 | 0:24 |
| 2 (5) шаршамбы | 3:46 | 4:16 | 5:46 | 14:30 | 21:23 | 22:53 | 0:23 |
| 3 (6) кесе йома | 3:47 | 4:17 | 5:47 | 14:30 | 21:23 | 22:53 | 0:23 |
| 4 (7) йома | 3:48 | 4:18 | 5:48 | 14:30 | 21:22 | 22:52 | 0:22 |
| 5 (8) шәмбе | 3:49 | 4:19 | 5:49 | 14:30 | 21:21 | 22:51 | 0:21 |
| 6 (9) йәкшәмбе | 3:50 | 4:20 | 5:50 | 14:30 | 21:21 | 22:51 | 0:21 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

БЫЛ ЙЫЛДА...

# ЙӘМҒИӘТ НИНДӘЙ...

## йырҙар шундай

**"Ҡош юлы" гитарала уйнап йырлаусыларҙың асыҡ фестиваленең башҡорт йәштәре араһында популяр булыуының сәбәбе нимәлә?**

**Артур Батыршин, "Ҡош юлы" фестивален ойоштороусыларҙың береһе:** Һуңғы йылдарҙа башҡорт милли эстрада сәнғәте бер төрлөгә әйләнде. Шуға ла милли мәҙәниәтебеҙ, сәнғәтебеҙгә битараф булмаған бер төркөм кешеләр йыйылдыҡ та, бөтөнләй яңы форматтағы сара үткәреү тураһында һөйләштек. Рәсәй кимәлендә "Ҡош юлы" кеүек рок, бард йүнәлешендә фестивалдәр үтеп тора, шуға ла уны бөтөнләй яңы күренеш тип атап булмаç ине. "Ҡош юлы" - гитарала уйнап, тере тауышҡа йырлаусы ижадсыларҙы ғына түгел, уларҙың ижадын үҙ итеүсе тамашасыларҙы ла үҙ ҡорона туплай алды. Ошо йүнәлештә ижад итеүселә урта быуын йырсыларының һәр ваҡыт ярҙамға килеүе лә быға булышлыҡ итә. Башта ҡатнашыусыларҙың һаны сикле булыр кеүек тойолһа ла, үҙҙәре йырҙар яҙған, үҙҙәре уларҙы башҡарған, әммә артист булырға теләмәгән кешеләр күп булыуын асыҡланды. Шуға ла фестивалдең конкурс өлөшө лә шартлы ғына, бәйге үткәреп, еңеүселәрҙе билдәләү - уның төп маҡсаты түгел. Конкурс тип иғлан итһәң, кешенең әүҙемлеге көсәйә, уларҙы сәм барлыҡҡа килә. Икенсе йылдан иһә фестиваль ваҡытында түгел, фестивалдә ҡатнашыу өсөн интернетта ғына бәйге буласаҡ. Әйткәндәй, интернет беҙгә гитарала уйнап йырлаусыларҙы табыу, ойоштороуҙа ҙур ярҙам итә, билдәле булыуынса, "Ҡош юлы"ның тәүге өлөшө тап шунда бара. Тыңлаусыға башҡарыусыны танытыу өсөн интернет уңайлы ысул. Йырҙары аша йәштәрҙең йәмғиәттә барған ниндәйҙер социаль үҙгәрештәргә шәхси ҡарашын белдереүе лә яҡшы, йәмғиәт ниндәй - йырҙар шундай, тип бушҡа ғына әйтмәйҙәр бит. Әгәр ҙә ғәҙәти артист публикаға ярарға, популяр булырға ынтылып ижад итһә, "Ҡош юлы" фестивалендә ҡатнашыусылар күңелендәге тойғоларын йырға һала.

Шулай ҙа "Ҡош юлы"ның төп үҙенсәлеге - уның фекерҙәштәрҙе бер майҙанға йыйып, аралашырға мөмкинлек биреләүеләр, моғайын. Фестиваль сиктәрендә ойошторолған төрлө ҡорҙар, әйтәйек, башҡорт бард мәҙәниәте үҙенсәлеге һәм үҫешенә бәйле "түңәрәк өҫтәл", башҡорт шағирҙары ярышы шулай уҡ был йүнәлеште камиллаштырыуға булышлыҡ итә. Шуның өсөн дә был фестиваль йылдан-йыл билдәлелек яулай.

## КОТЛАЙБЫҘ!

Июнь айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙ - **Благовещен районы** Ильино Поляна ауылынан Лилиә Бакирова, **Стәрлетамаҡ районы** Наумовка ауылынан Г. Динисламова, Лилиә Әхмәҙуллина, **Дыуан районы** Мәсәғүт ауылынан Әлфирә Нуриева, **Хәйбулла районы** Әбүбәкер ауылынан Зилә Сынбулатова, **Әбйәлил районы** Байым ауылынан Әнүәрә Хәйбуллина, **Ейәнсура районы** Байдәүләт ауылынан Сажиҙә Хәйбуллина, Исәнғол ауылынан Ринат Әлмөхәмәтов, **Стәрлебаш районы** Ибраҡай ауылынан Гүзәл Сәлихова, **Баймаҡ районы** Төркмән ауылынан Илшат менән Рифат Ишморатовтар, **Өфө ҡалаһынан** Римма Ғәзиева, Гөлсәсәк Шангина, Лилиә Хәмиҙуллина, Фларит Йәнбулатов, Наилә Усманова, Миләүшә Мөхәмәҙиева һәм башҡаларҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Хоҙай Һеҙҙе күңел тынысылығынан, һаулыҡтан, донъя ҡыуаныстарынан айырмаһын.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠОРҒА ЙЫЙЫЛДЫ...

## Өфө йылғаһы буйы башҡорттары



**Яҙғы сәсеү осоро тамамланып, трактор тауышы һабантурғайҙың моңло һайрауы менән алмашынған мәлдә Башҡортостандың бөтөн төбәктәрендә гөрләп үткән һабантуйҙарға Өфө йылғаһы буйы башҡорттары ла ҡушылды. Балаҡатай районының Билән ауылы эргәһендәге киң аҡланға Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондарынан, Силәбе һәм Свердловск өлкәһенән Өфө йылғаһы буйында йәшәүсе ҡәрҙәштәр йыйылды.**

"Өфө йылғаһы буйы башҡорттары" төбәк-ара фольклор байрамы быйыл икенсе тапҡыр ғына үткәрелеүгә ҡарамаҫтан, халыҡ араһында киң танылыу яулап өлгөрҙө. Быны ул көндө Билән ауылы яғына табан төрлө тарафтарҙан ағылған кешенең күплеге иҫбатланы. Ғаиләләре менән ял итергә, милләттәштәре, ырыуҙаштары менән күрешергә килеүселәрҙең әүҙемлеге хатта ойоштороусылар өсөн дә көтөлмәгән ҡыуаныс булды. Билән ауылының яланы был көндө боронғо башҡорт йәйләүен хәтерләтә ине: теҙелеп киткән тирмәләр эргәһендә ҡунаҡтарҙы башҡорт милли аштары менән һыйланырға тәҡдим итеп, өлтөрәп йөрөгән уңған хужабикәләр, ете быуынын белеү менән ғорурланыуҙан бигерәк, өҙөлгән туғанлыҡ ептәренең осона сығыу ниәтендә төҙөлгән шәжәрәләре менән ихлас таныштырыусылар ҡаршы алды. Башҡорт йыйыны булғас, көрәшһеҙ, уйындарһыҙ ҙа булмай. Тирмәләрҙән бер яҡ ситтә аҫыл ир-уҙамандар көс һынашты, отҡорҙар һәм состар бөтөн традицион ярыштарҙа ҡатнашып, иҫтәлекле бүләктәр отто. Байрам сәхнәһендә райондың ғына түгел, Үрге Өфәләй, Нязепетровск, Екатеринбург, Силәбе ҡалаларынан, Арыҫлан, Өфө-Шөғөр, Шөкөр ауылдарынан алыҫ араларҙы яҡынайтып килеүсе музыкаль коллективтар сығыш яһаны. Күркәм башҡорт фольклоры байрамы тамашасыларына Балаҡатай районы хакимиәт башлығының социаль һәм гуманитар мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Мәсғүт Миниғәлин, район Советы рәйесе Нәғим Ҡәйүмов, "Урал" хәйриә фонды вәкиле Ришат Зәйнәғәбдинов, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Советы ағзаһы Гөлфиә Янбаева, Свердловск өлкә башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Фәймә Йосопова, Свердловск өлкәһенең Красноуфимск районы муниципаль округы хәкимиәте башлығы Роман Родионов ҡотлау һүҙҙәрен еткерҙе.

Йыйын яҡташтарҙы осраштырыу ғына түгел, ә битараф булмаған милләттәштәрҙең ошо төбәктә хәл итеүгә тейеш көнүҙәк проблемалар буйынса фекер алышыуын да маҡсат иткәйне. Башҡортостандың Архив эштәре буйынса идаралығы етәксеһе Илфат Ғәлләмов, БР Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр институтының этнология бүлеге мөдире Юлдаш Йосопов, яҙыусы, тыуған яҡты өйрәнеүсе Әсләм Арыҫланов, райондың Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары "Тыуған яҡтың тарихын өйрәнеү: ысулдар һәм технологиялар" темаһына арналған ғилми-ғәмәли конференцияла ҡатнашты. Уның барышында Өфө йылғаһы ярына яҡын урынлашҡан ер-һыу, торама пункт атамаларының боронғо яҙылышын тергеҙеү, башҡортса һәм русса дөрөҫ варианттарын ҡулланылышҡа индереү, Билән ауылына тиклем асфальт юл һалдырыу мәсьәләләре күтәрелде.

-Балаҡатай районында йәшәүсе халыҡтың яртыһы - башҡорттар. Был ерҙәр уларҙың аҫаба биләмәһе, бөтөн ер-һыу, торама пункттарға атаманы башҡорттар ҡушҡан. Тик Рәсәй хөкүмәте тарафынан үткәрелгән тәүге халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында улар руссаға дөрөҫ тәржемә ителмәгән һәм шунан үҙгәрештәр башланған, - тип һөйләне Әсләм Арыҫланов. - Мәҫәлән, "Балаҡатай" һүҙен генә алғанда ла, уның русса яңғырашы "Белокатай" булырға тейеш түгел. Ҡатай ырыуы төрлө тармаҡтарға бүленһә лә, аҡ ҡатайҙар юҡ. Әле матур йыйын үткәрелгән Билән ауылы ла руссаға дөрөҫ тәржемә ителмәй. Башҡортса ике тау араһындағы тәпәшерәк ер мәғәнәһен аңлатҡан һүҙ рус теленә "Белянка" тип ауҙарылып, бөтөнләй икенсе төшөнсәне - "шайтан күбәләген" аңлата. Иң мөһиме, Өфө йылғаһын "Ҡариҙел" тип йөрөтөп яңылышабыҙ. "Ҡариҙел" тип башҡорттар борон-борондан Кама йылғаһын атаған. Тарихыбыҙ, телебеҙ киләсәк быуынға түкмәй-сәсмәй барып етеүен теләһәк, ата-бабаларыбыҙ биргән ер-һыу, ауыл, район атамаларын да кире ҡайтарырға, дөрөҫ тәржемә итергә бурыслыбыҙ. Бынан тыш, Билән ауылы халҡы асфальт юл һалыныуын күптән көтә. Балаҡатай, Билән, Перевоз ауылдарын тоташтырған юл яҡшыртылғанда, Свердловск өлкәһенә тура сығып йөрөргә булыр ине.

Күтәрелгән был мәсьәләләр буйынса ниндәйҙер резолюциялар ҡабул ителмәне, әлбиттә. Ә шулай ҙа ҡатнашыусылар уларҙың ыңғай хәл ителеренә, шулай уҡ "Өфө йылғаһы буйы башҡорттары" төбәк-ара фольклор байрамы киләсәктә Рәсәй Федерацияһының төрлө өлкәләре сиктәрендә бүленеп ҡалған милләттәштәр араһында бәйләнеш ептәрен тергеҙерлек, башҡорттарҙы ойошторорлоҡ республика сараһы кимәленә күтәрелер, тигән ышаныс белдерҙе.

**Камила ҒӘЛИЕВА әҙерләне.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИР КИЛТЕРӘ БЕЛҺЕН...

## ҡатын еткерә белһен

Ялҡау аҡрын барһа ла, ялҡаулыҡ артынан ҡыуып етер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Уға нисек аҡыллы булмаҫҡа, ти, - бөтә ғүмере буйы ахмаҡтар араһында йәшәй бит...

**(Василий Ключевский).**

Беҙ аҡсаға ҡарағанда йөрәгебеҙҙе ихласыраҡ тәҡдим итергә әҙербеҙ.

**(Ноуэл Ковард).**

Ҡатын-ҡыҙ булыу шуның өсөн ауыр, сөнки уға нигеҙҙә ир-ат менән эш итергә тура килә.

**(Джозеф Конрад).**

Яҡшы хакимлыҡ иткән илдәрҙә ярлылыҡтан оялалар. Насар хакимлыҡ иткән илдә байлыҡ оят һынала.

**(Конфуций).**

Бер ваҡытта ла күңелһеҙлектәрҙең ҡаршыһына сыҡма. Тыныс ҡына ултыра бир, шул саҡта ун күңелһеҙлектең туғыҙы һиңә килеп етмәйәсәк.

**(Калвин Кулидж).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Дөрөҫ итеп сәй эсеү, тигәнде нисек аңларға? Бер Вьетнам фәлсәфәсеһе был өлкәлә ошондай кәңәштәр ҡалдырған:**

**Сәй эсеүҙән ләззәт алыу өсөн иғтибарҙы тулыһынса әлеге мәлгә йүнәлтергә тейешбеҙ. Башҡа нәмә тураһында уйламағанда ғына беҙ сәй ҡойолған һауыттың йылыһын тоясаҡбыҙ. Тап шулай иткәндә генә сәйҙең тәме тойола, ыңғай үҙенсәлектәре күренә. Үткәндәр тураһында үкенеп, киләсәк хаҡында ҡайғырған саҡта сәйҙән ләззәт алып булмай. Ниһайәт, сәй һауытының төбөнә ҡарап, уның буп-буш ҡалыуын күрһәң, нимә кисерерһең икән?**

**Тормошта ла шул уҡ. Беҙ әлеге мәл, бөгөнгө көн менән тулы ҡанлы йәшәмәһәк, ғүмерең күҙ асып йомған арала үтер ҙә китер. Йөрәктә тик үкенеү тойғоһо ғына ҡалыр: тормоштоң тәмен, матурлығын ғына күреп йәшәмәгәнбеҙ дәһә! Арғымаҡтай сабып үткән дә киткән...**

**Йылдар үтте инде: биргән һабағы, тәжрибәһе өсөн рәхмәт әйтәйек тә, уларҙы артта ҡалдырайыҡ. Алда - киләсәк, ләкин кемгәлер килер ул, кемгәлер юҡ... Киләсәккә пландар ҡороуын ҡорабыҙ ҙа ул, ләкин улар хаҡында борсолоп, бөгөнгө көндөң бәхетле мәлен урлайбыҙ бит.**

**Үткәндәрҙе артта ҡалдырып, киләсәк хаҡында артыҡ борсолоуҙы туҡтатһаҡ ҡына, әлеге мәл менән йәшәй башлаясаҡбыҙ. Шул шарттарҙа ғына тормош тулы, йәмле, бәхетле буласаҡ..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 27 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5353
Заказ 2010